ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

31-6 декабрь - ғинуар (аҡъюлай - һыуығай) 2022

№52 (1042)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!* ***Беҙ әле дәүерҙәр алышынған осорҙа - һыуғоярҙар эраһында йәшәп ятабыҙ икән. Ә был дәүерҙе белемле, мәҙәни, мәғрифәтле, мөхәббәтле кешеләр заманы, тиҙәр. Йыһангирҙәр билдәләүенсә, һыуғоярҙар дәүере кешеләре әйләнә-тирәһендә - тәртип, Ерҙә, донъяла тыныслыҡ-именлек булдырыу өсөн яуаплылыҡ ала, бар кешелеккә һөйөү энергияһын йүнәлтә. Үҙебеҙҙә һыуғоярҙар эраһына лайыҡлы сифаттар тәрбиәләйек!*** *Яңы йыл менән!*

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Республика Башлығы әйтте!**



4-5

**"Ҡуянмын да, бесәймен дә кеүек", -**

**ти Ҡыш бабайыбыҙ Хәким Мортазин**



8-9

**Ғаилә ығы-зығыларын...**

**йырлап көйләйек!**



11

**Йомшаҡ, тыныс, йортауай!**



12-13

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# ӘЙҘӘГЕҘ, ҮҘГӘРӘЙЕК!

**Өс йылға һуҙылған, тәүҙә ҡоттарҙы осороп ябырылған тажҙәхмәт сире, шунан тыныс тормошобоҙға үҙгәреш индергән махсус операция рәүешендәге һынауҙар осоронон тағы бер йылы тамамлана. Әлбиттә, яңы йылда был һынауҙар дауам итмәһен ине инде, тип теләйбеҙ ҙә ул. Ә шулай ҙа "Яҡшыға өмөтләнеп, насарына әҙер булырға кәрәк", тигән хәҡиҡәтте лә онотмайбыҙ.**




Ысынында, беҙ ошо "Яҡшыға өмөтләнеп, насарына әҙер бул!" тигән ҡағиҙәне башыбыҙҙан ғына түгел, күңелебеҙҙән, рухыбыҙҙан да сығарып бөткәнбеҙ түгелме икән? Әлбиттә, һәр саҡ яҡшыға өмөтләнеп йәшәйбеҙ йәшәүгә. Тик был өмөт-хыялдарыбыҙ быға саҡлы үҙебеҙҙең шәхси көнитмеш, үҙебеҙҙең уңайлыҡтар, үҙебеҙҙең "ашҡаҙан" кимәлендә генә булды, ахыры. Ә бөгөн беҙ үтә ҙур, глобаль кимәлдәгегә өмөтләнәбеҙ: Еребеҙгә тыныслыҡ килһен! Әммә өмөт-ниәтте бит йөрәктә һәм беләктә булған көс, ихласлыҡ, ныҡышмалыҡ, ялҡындай дәрт менән тормошҡа атҡарырға тырышырға ла кәрәк. Унын өсөн, әле яу яланында йөрөгәндәр кеүек, ҡулға ҡорал алырға, заманса һуғыш ҡоралдары һәм алымдары үҙләштерергә түгел, ә һәр кемдең ғәр-ғәйрәтенән килгәнде атҡарырға - ыңғай энергиябыҙҙы Йыһанға йүнәлтергә, доғаларҙа булырға һәм... бик күп кире сифаттарҙан арынырға кәрәк икәнен аңлайбыҙмы? Кире сифаттар, тигәндәй. Уларҙың ошоноһо ғына ла тетрәндерә - иң негатив әҙәмдәргә әйләндек. Быға кем, нимә ғәйепле? Интернет, социаль селтәрҙәрме? Эйе, улар әҙәмдәрҙең эс керен, ҡара нәфрәтен, барлыҡ кире сифаттарын тышҡа сығарыу, бар донъяға таратыу механизмына әйләнде. Ошо механизмды файҙаланғандарҙың күңел ҡапҡаларын шаҡыу, уларҙан ниндәйҙер ыңғай үҙгәрештәр көтөү мөмкинме икән? Ә шулай ҙа үҙгәрергә тура киләсәк уларға ла - дәүер шуны талап итә...

**(Дауамы 16-сы биттә).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Башҡортостан Республикаһы Башлығы тарафынан 2023 йыл төбәктә "Атайсалға - изге ғәмәлдәр" йылы тип иғлан ителде. Ә һеҙ үҙ ауылығыҙға, районығыҙға ниндәй ярҙам күрһәттегеҙ, күрһәтергә хыялланаһығыҙ?***

***Урал КИЛСЕНБАЕВ, Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары:*** Элек-электән беҙҙең төбәктә бер-береңә ярҙам итеү, кәрәк саҡта ныҡлы терәк булыу ғәҙәти күренеш, изге йола. Башҡорттарҙа шулай уҡ электән йорт күтәреү, мал һуйыу, бесән әҙерләү һәм башҡа ошондай оло эштәр бергәләп - өмә тигән йола аша атҡарылған. Шулай уҡ бер-береңә ҡарата ғына түгел, ә тыуып үҫкән ереңә лә ярҙам күрһәтеү, меценатлыҡ һәр ваҡыт булған һәм әле лә бар. Ошондай ярҙам күрһәтергә теләгән, илһөйәр булған, үҙенең тыуған ерен яратҡан кешеләрҙе берләштереү маҡсатында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров инициативаһы менән "Атайсал" проекты булдырылды. Ваҡыт был проекттың бик кәрәкле, файҙалы икәнен асыҡ күрһәтте. Проект старт алғандан башлап әллә күпме кеше үҙенең тыуған яғына төрлө кимәлдәге ярҙам күрһәтте һәм әлеге көндә лә был эш туҡтамай, киреһенсә, әүҙемләшә генә бара. Кемдер үҙе генә ниндәйҙер эште атҡарып сыға, шулай уҡ берләшеп ярҙам күрһәтеүселәр ҙә етерлек.

"Атайсал" проектының төп асылы - кешенең үҙ тыуған еренә ҡарата һөйөүен, ихтирамын күрһәтеү ул. Ә проекттың төп бурысы - төрлө тарафтарҙа йәшәгән кешеләрҙе тыуған төбәге, ауылы, районы тирәләй туплау. Кеше ҡайҙа ғына йәшәмәһен, уның туғандары, тыуған ере менән бәйләнеше һәр саҡ була һәм ошондай проекттар уларҙы бер-береһенә тағы ла нығыраҡ ылыҡтырыуға ярҙам итә лә инде.

Ошо проект сиктәрендә, мәҫәлән, ауылдаштарым менән бергәләп ауыл зыяратында ҡоролмалар һаҡлау өсөн махсус хужалыҡ бинаһы төҙөп ҡуйҙыҡ һәм шишмәне тәртипкә килтерҙек, төҙөкләндерҙек. Шулай итеп, теләге булғандар бергәләшеп кәрәкле материал һатып алып, ҡул көсө түгеп, ваҡытын бүлеп, төҙөлөштә, төҙөкләндереүҙә ҡатнашты. Был эшкә үҙ өлөштәрен индереү өсөн ауылында оҙаҡ йылдар булмағандарҙың ҡайтып төшөүен күреү бик ҡыуанысլы күренеш булды. Бер-беребеҙ менән осрашып, матур итеп аралашып, бала саҡ һәм йәшлек хәтирәләрен иҫкә төшөрөп, берҙәм һәм күңелле кәйефтә атҡарып сыҡтыҡ был ниәттәрҙе. "Атайсалға - изге ғәмәлдәр" йылы тип аталған 2023 йылда бындай эштәр тағы ла күберәк булыр, төрлө проекттар тормошҡа ашырылыр, һәр беребеҙҙең тыуып үҫкән ере менән бәйләнеше тағы ла нығыр, тип ышанам.

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Башҡортостан Республикаһы Башлығы тарафынан 2023 йыл төбәктә "Атайсалға - изге ғәмәлдәр" йылы тип иғлан ителде. Ә һеҙ үҙ ауылығыҙға, районығыҙға ниндәй ярҙам күрһәттегеҙ, күрһәтергә хыялланаһығыҙ?

***Хөрмәтулла ҮТӘШЕВ, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы:*** Атайсал" проекты тыуған ауылы, районы йә ҡалаһы үҫешенә үҙ өлөшөн индерергә теләүселәрҙе берләштерә. "Тыуған яғығыҙҙа мәсет төҙөү, балалар майҙансығы булдырыу, һуғыш ветерандары иҫтәлегенә стела ҡуйыу, ташландыҡ шишмәне тәртипкә килтереү һәм башҡа идеялар менән янаһың икән, махсус порталда теркәл һәм үҙең кеүек әүҙем яҡташтарың араһынан фекерҙәштәр тап!" тигән саҡырыуҙы ҡабул итеп, мин үҙем дә "Атайсал"ға ҡушылдым. Былтыр, Хәйбулла районындағы тыуған ауылым Таштуғайҙа ҡоҙоҡто таҙартып, махсус ҡоролма ҡуйырға ниәтләгәнемде ауылдаштарыма, туғандарыма әйттем. Таштуғайҙар тәҡдимемде дәррәү күтәреп алды. Өмә үткәреп, эште атҡарып та ҡуйҙылар. Хәҙер был ҡоҙоҡ тирә-яҡтан килгән юлаусыларҙы ла әллә ҡайҙан үҙенә саҡырып тора. Унан халыҡ өҙөлмәй. Ошо матурлыҡҡа үҙ өлөшөмдө индереүемә ҡыуанып бөтә алмайым.

***Гөлфирә АБДУЛЛИНА, Өфө дәүләт фән һәм техника университеты Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы, профессор, филология фәндәре докторы:*** Атайсал, йәнтөйәгебеҙ һәр кемдең күңелендә йәшәйҙер ул. Шөкөр, Ишембай районындағы тыуған ауылым Маҡарҙа һағынып ҡайтырлыҡ атай йорто бар, ейәндәр йәйге каникулын яратҡан өләсәләре янында үткәрә, ял көндәрендә лә ҡайтып, хужалыҡ эштәрендә булышып, саф һауа һулап килергә тырышабыҙ. Йәнтөйәгемдең, яҡташтарымдың көнитмеше тотош күҙ алдында... Ниндәйҙер төҙөкләндереү эштәренә тотонмаһам да, ҡулымдан килгән ярҙамымды күрһәтәм йәнтөйәгемә. Үткән йылда тыуған мәктәбемә һәм ауыл китапханаһына 14 дана башҡорт баҫмаһы яҙҙырғайным, быйыл да ошо традицияны дауам итергә булдыҡ: аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә 5 дана "Аҡбуҙат" журналы һәм 5 дана "Йәншишмә" гәзитенә яҙылып бүләк иттем. Рухи байлыҡ матди байлыҡтан күпкә ҡәҙерлерәк: бәләкәстәр кинәнеп башҡортса баҫмалар уҡыр, тип уйланым. Ситтә йәшәгән ауылдаштарыбыҙ бихисап, улар тағы ла ниндәйҙер изге эштәр, ғәмәлдәр ҡылырға саҡырыу ташлай икән, беҙ берҙәм ҡушылырға әҙер торабыҙ. "Атайсалға - изге ғәмәлдәр" йылында бындай саҡырыуҙар күп булыр, тип өмөт итәм.

***Рәмзиә КӘРИМОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт сараһы хеҙмәткәре:*** Башҡортостан Башлығының 2023 йылды "Атайсалға - изге ғәмәлдәр" йылы тип иғлан итеүен бик хуп саҡырыу тип ҡабул иттем. Кеше тарихи тамырҙарын онотмаҫҡа, тыуған төйәге менән бәйләнеште өҙмәҫкә тейеш, сөнки тамыры булмаған ағас тиҙ ҡорой икәнен беләбеҙ бит инде. Бөгөн беҙ тормошта үҙ урыныбыҙҙы табып, матур итеп йәшәп ятабыҙ, аяғыбыҙҙа ныҡ баҫып торабыҙ икән, бында, һис һүҙһеҙ, тыуған еребеҙ өлөшө бар икәнен дә беләбеҙ. Атайсал - ул изге урын, уға хәлдән килгәнсә ярҙам итеү һәр беребеҙҙең бурысы.

Мәҫәлән, минең күңелдә лә үҙем белем алған Әбйәлил районы Әбделмәмбәт мәктәбе уҡыусыларына премия булдырыу хыялы йәшәй ине. Яңы 2023 йыл алдынан ошо теләгемде тормошҡа ашырып ҡуйҙым. Күптән түгел генә китап уҡырға яратҡан, яҙышҡан, уҡыуҙа һәм йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашҡан өс уҡыусыға үҙемдең премиямды тапшырҙым. Уны йыл һайын бирермен, тип ниәтләйем. Аҡса бер ваҡытта ла етмәй, бюджет хеҙмәткәрҙәренә генә түгел, хатта миллионер менән миллиардерҙарға ла, ә бала күңелен күреү, дәртләндереү иһә матди байлыҡтан күпкә юғарыраҡ. Ошондай эштәр - беҙҙең киләсәккә һалған инвестиция.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

БЫЛ АЙҘА...

# БЕРЕККӘНДӘН ЯУ ӨРККӘН

**Яңы йылдың бисмиллаһы тыуа - һыуығай! Ниндәй булыр ул, нимә көтә беҙҙе? Һәр кемде лә борсой торғандыр бындай һорауҙар, әммә бер кем яуап бирә алмаҫ уға: күрәҙәсе лә, экстрасенс йә астролог та, хатта власть әһелдәре - чиновниктар һәм депутаттар ҙа...**



Фараздар артынан виртуаль сығанаҡтарға килеп кенә әләкмә инде: береһенән-береһе хәүефлерәк, әҙәм ҡурҡытырлыҡ хәбәрҙәр менән тулы интернет. Нострадамустан башлап, Мессинг менән Ванга ла, изге Матрона ла, бөгөнгө экстрасенстар ҙа халыҡ иңенә төшәсәк ауыр һынау, ҡытлыҡ, һуғыш һәм сир-зәхмәттәрҙән ҡырылыш хаҡында күрәҙә ҡылалар, имеш, ләкин бында интернет сығанаҡтар тарафынан билдәле фараздарҙы һүҙмә-һүҙ бөгөнгөгә ҡайтарып ҡалдырыу, әҙәм күңелендә хәүеф-шом тыуҙырыу маҡсатында ҡуйыртыуҙар ҙа юҡ түгелдер. Дөрөҫ, еңеллек, уйһыҙлыҡ заманы түгел-түгелен, ләкин бөтәһенән дә бигерәк бар донъяға бөгөн тыныслыҡ, илебеҙгә именлек кәрәк.

Билдәле Иран күрәҙәсеһе һәм халыҡ табибы Мехди күптән түгел "5-се канал"ға интервьюһында әйтмешләй, бөгөнгө хәл иткес осорҙа ҡапма-ҡаршылыҡты Рәсәй үҙ халҡының берҙәмлеге, ныҡлығы һәм хаҡлығына инаныуы менән генә еңеп сығасаҡ. Йәшәйешебеҙҙә яҡшыға, именлеккә өмөт тыуҙырыуҙың тағы бер ҡеүәтле сараһы булараҡ, изге Матронаның, Аллаһтан йөҙ бормағыҙ, хәҡиҡәткә юл - Аллаһ аша ғына, тигән васыятын иҫтә тотоу фарыз, ти дин әһелдәре. Әйткәндәй, әҙәм балаһын тап ошо хаҡта иҫкәртеп, хәтерен яңыртып тороусы билдәле датаһы ла бар яңы тыуған һыуығайҙың: уның тәүге көнө үк - **1 ғинуар** -Тыныслыҡ һәм именлек хаҡына бөтөн донъя ғибәҙәт ҡылыуға бағышлана. Был көн 1967 йылда Рим Папаһы Павел IV тарафынан һуғыштарҙы туҡтатыу, Ер йөҙөндә тыныслыҡ һәм татыулыҡ булдырыуҙы һорап, Аллаһҡа ялбарыу көнө тип иғлан ителә. Башҡа илдәрҙә нисектер, әммә биләмәһендә Ватиканды һыйындырған Италия властары быға төкөрөп бирә, сөнки уларҙың "аллаһы" - һуғыш суҡмары һәм хөсөтсө НАТО, шунлыҡтан, илдәге оппозиция ҡыҫымына ҡарамаҫтан, бындағы властар Рәсәйгә ҡаршы санкция режимына буйһона һәм уны үтәй. Уның ҡарауы, ябай итальяндар күпкә аңлыраҡ һәм позитив фекер эйәләре булып сығыш яһай. Ошо көндәрҙә меңәрләгән кеше НАТО-ның Италиялағы базаһы янында Рәсәйгә иғлан ителгән санкцияларға ҡаршы акцияға сыҡты һәм Италия властарынан Украинаға ҡорал ебәреүҙе туҡтатыуын талап итте. Был да иман юлына бер аҙымдыр. Христиандар был осор изге Николай Сербскийҙың халыҡтар менән идара итеүселәр хаҡында ҡылған ғибәҙәтен иҫкә төшөрә: "Правители народов земных управляют чужой собственностью, ибо управляют тем, что Твое, Божье и пусть они правят по Твоей же, Божьей святой волею". Илдәр хакимдарының кабинеттарына яҙып элерлек һүҙҙәр бит!

Башҡа илдәрҙә һәм диндәрҙә тағы нисектер, әммә Ислам дине донъяға тыуғандан алып тыныс һыйышып йәшәү, ғәҙеллек һәм изгелек принциптарына таяна. Мәғлүм булыуынса, Исламда иң көслө ғибәҙәт - ул намаҙ. Мосолман халҡы был ғибәҙәтте көнөнә биш тапҡыр ҡыла, ә йома намаҙҙары мәсеттәрҙә бергәләп уҡыла. Һуңғы ваҡыттарҙа халыҡ айырыуса күпләп килә Аллаһ йорттарына, тыныслыҡ һорап, яуҙағы уландарҙың тиҙерәк имен-иҫән йөрөп ҡайтыуҙарын теләп ялбара, намаҙҙар уҡый, ҡорбандар сала, аяттар бағышлана, тик ишетелһен, барып етһен, ҡабул булһын ғына изге теләктәр!

Юғиһә бит, ядро һуғышы ихтималлығына бәйле хәүеф-хәтәр эсендә йәшәй донъя халҡы. Илдәге эре ҡалаларҙа бомбанан йәшеренеү урындары, подвалдар барланып, тикшерелә башлағас, халыҡ күңелендә хәүеф уғата көсәйҙе. "Бындай хәүеф арта бара, уның нимәһен йәшерергә?" - тине Рәсәй Президенты В. Путин да граждандар йәмғиәтен һәм кеше хоҡуҡтарын үҫтереү буйынса совет ағзалары менән осрашыуҙа. Ләкин, тип баҫым яһаны ул, бындай ҡоралға беҙ, һөжүм була ҡалһа, фәҡәт һаҡланыу, яуап биреү сараһы булараҡ ҡарайбыҙ. "Беҙ аҡылдан яҙмағанбыҙ, ядро ҡоралының нимә икәнлеген аңлайбыҙ. Беҙҙә ул бар һәм ул хатта башҡа илдәрҙекенә ҡарағанда күпкә алдынғыраҡ, замансараҡ та, ләкин был ҡорал беҙҙең өсөн ядро

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 28 декабргә коронавирус инфекцияһынан ике үлем осрағы теркәлгән. Бер тәүлектә 327 кеше COVID-19 йоҡторған. Был хаҡта республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы хәбәр итте. Ведомствонан хәбәр итеүҙәренсә, әлеге ваҡытта 214 пациент (шул иҫәптән 142 оло йәштәге) стационарҙа дауалана. 12 кеше ауыр хәлдә ята, 4 пациент үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған. 1 861 кеше амбулатор шарттарҙа дауалана, 594-е 60 йәште уҙған.

✓Башҡортостандан Салауат Юлаев исемендәге өсөнсө иреклe батальон махсус хәрби операция зонаһына барып еткән. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. "Беҙ уларға үҙ бурыстарын үтәп, иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуҙарын теләйбеҙ. Улар яҡшы хәрби әҙерлек үтте, бының өсөн Рәсәй гвардияһы етәксеһе Виктор Васильевич Золотовҡа ҙур рәхмәт", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Артур Ғәлимйән улы Йомағужин Башҡортостан Башлығының Рәсәй Милли гвардияһы ғәскәрҙәре менән үҙара эш итеү буйынса кәңәшсеһе итеп тәғәйенләнде. "Тап ул өсөнсө ирекле батальон ойоштороу башланғысы менән сығыш яһаны. Ул Башҡортостан Республикаһы Башлығының Рәсәй Федерацияһы Милли гвардияһы ғәскәрҙәре менән, тәү сиратта, Салауат Юлаев исемендәге батальон менән үҙ-ара эш итеү буйынса кәңәшсеһе вазифаһына тәғәйенләнде", - тип билдәләне республика Башлығы.

✓Дауаханаларҙа һәм поликлиникаларҙа ОМС буйынса грипҡа һәм башҡа респиратор инфекцияларға тест үткәрелә. Тейешле ҡарарға Хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған. Был ҡарар грипп, шулай уҡ коронавирус менән сирләү осраҡтарының артыуына бәйле ҡабул ителде. Экспресс-тест инфекция төрөн асыҡлап, тейешле дауалау тәғәйенләргә мөмкинлек бирә. Бер үк ваҡытта коронавирусҡа ПЦР-тест үтергә мөмкин.

✓1 ғинуарҙан эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы буйынса түләүҙең максималь күләме арта. 2023 йылдан ғәҙәти килешеү буйынса һигеҙ йыллыҡ эш стажы булған хеҙмәткәрҙәр өсөн түләүҙең максималь суммаһы көнөнә - 2 736,99 һум, ә айына 84 846,69 һум була. Бынан тыш, эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙын гражданлыҡ-хоҡуҡи килешеү буйынса эшләгәндәргә лә түләйҙәр, әммә уҙған йылда улар страховка иғәнәләренең аныҡ суммаһын индергән осраҡта ғына.

*✓ Ҡуян атамалы йылда тыуғас, "Һин ҡуян йөрәкле арыҫланмы, әллә арыҫлан йөрәкле ҡуянмы?" тигән һорауҙы әле миңә йыш бирәләр. Эйе, йондоҙнамә буйынса арыҫлан булғас, был һорауҙы ысын тип ҡабул итәм.*



һуғышы конфликтын тотҡарлау, булдырмау өсөн кәрәк",- тине ул.

Кремлдең бындай позицияһын башҡалар ҙа аңлай, әлбиттә. Ҡушма Штаттарҙың Аҡ йорто вәкиле Джон Кирби әйтмешләй, ядро һуғышында еңеүсе булмаясағы хаҡында Вашингтон Мәскәү менән килешә. Ләкин шулай ҙа АҠШ-тың төп власть эйәләрен ваҡыт-ваҡыты менән "ядро өйәнәге" тотоп алғылауы бөтөн донъяға мәғлүм. Ҡайһы бер эксперттар фекеренсә, АҠШ-тың был йәһәттән фантазияһы бай: Рәсәй аша үҙенең "төп иҡтисади һәм геополитик көндәше" Ҡытайға ынтылыу. Ләкин, халыҡ әйтмешләй, берәүҙән икәү яҡшы. 20 декабрҙә АҠШ-тың НАТО-лағы илсеһе Дж. Смит Рәсәй менән Ҡытайҙы НАТО альянсын көсһеҙләндереүгә йүнәлтелгән "үҙ-ара стратегиялар" менән алмашыуҙа ғәйепләп сығыш яһаны. Шулай булырға тейеш тә, берҙәмлектә - көс. Был ай календарындағы төп даталар ҙа бит башынан аҙағынаса Ер йөҙөндә тыныслыҡ булдырыуға бағышланған. **29 ғинуар** - Ядро һуғышы хәүефенә ҡаршы тупланыу көнө. Халыҡ әйтмешләй, береккәндән яу өркkән.

Һыуығайҙа билдәләнәсәк тағы ла ошондай көндәр бар: Яңы йыл **(1)** һәм Яңы йыл каникулдары **(1-6, 8)**, Бөтөн донъя тыныслыҡ, йәки Тыныслыҡ хаҡына бөтөн донъя ғибәҙәт көнө **(1)**, "Музей һәм балалар" аҙналығы **(4-10)**, Халыҡ-ара ашауҙы сикләү **(5)**, Раштыуа **(7)**, Балалар киноһы **(8)**, Бөтөн донъя "рәхмәт", Бөтөн Рәсәй ҡурсаулыҡ һәм парк **(11)**, РФ прокуратура хеҙмәткәрҙәре **(12)**, "Йәш юҡһыл", 1990 йылдан алып "Йәшлек" гәзитенең сыға башлауына - 100 йыл **(12.1923)**, "Башҡортостан ҡыҙы" журналы ойошторолоуға - 55 йыл **(12 ғинуар,1968)**, Рәсәй матбуғаты **(13)**, Рәсәйҙә халыҡ бағымсыһы **(14)**, РФ Тәфтиш комитеты ойошторолған, Википедияның тыуған, Бөтөн донъя дин **(15)** көндәре, Балалар уйлап сығарыуҙары, Ҡыҙыл Армия Польшаның баш ҡалаһы Варшаваны фашистарҙан азат иткән **(17 ғинуар, 1945 йыл)** көндәр, Хеҙмәт ветераны **(18)**, Алкоголгә бәйлелектән ҡотолоу **(21)**, Бөтөн донъя ҡар, йәғни Спорттың ҡышҡы төрҙәре **(22)**, Рәжәб айының тәүге көнө. Умра - кесе хаж **(23)**, "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркы булдырылыуға - 25 йыл **(23 ғинуар, 1998)**, Халыҡ-ара мәғариф **(24)**, Татьяна, йәғни студенттар, Рәсәйҙә МДУ-ның тыуған һәм Рәсәй Ҡораллы Көстәрененң Генераль штабы **(25)** көндәре, Халыҡ-ара таможня, Экологик белем **(26)** көндәре, Ленинград блокадаһын өҙгән **(27 ғинуар, 1944 йыл)** көн, Халыҡ-ара персональ мәғлүмәттәрҙе һаҡлау, Бөтөн донъя эшһеҙҙәр, Ядро һуғышы янауына ҡаршы халыҡ-ара тупланыу көндәре, Халыҡ-ара интернетһыҙ, Автомобиль уйлап сығарылған **(29)**, Һыуыҡ һәм Ҡарһылыу **(30)** көндәре.

**Һыуығайҙа тыуғандар:**

**1 -** Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Әмир Әминевҡа - 70 йәш** (1953).

**-** шағирә, журналист, Бөрйән мәғлүмәт үҙәгенең бүлек мөдире **Айһылыу Ғарифуллинаға - 55 йәш** (1968).

**-** режиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, РФ Кинематографтар берлеге ағзаһы **Вилүрә Иҫәндәүләтоваға - 55 йәш** (1968).

**2 -** күренекле прозаик, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, С.Юлаев исемендәге БАССР премияһы лауреаты, өс тапҡыр "Почет билдәһе" ордены кавалеры **Зәйнәб Биишеваның тыуыуына - 115 йыл** (1908-1996).

**-** Башҡорт дәүләт филармонияһы йырсыһы, Өфө дәүләт сәнғәт институтының вокал сәнғәте уҡытыусыһы, Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы **Тәнзилә Үҙәнбаеваға - 70 йәш** (1953).

**17 -** табип, медицина фәндәре докторы, "Красноусольск" шифаханаһы директоры, Рәсәйҙең атҡаҙанған һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Рәмил Бәҙретдиновҡа - 65 йәш** (1958).

**20 -** 2-се Республика дауаханаһының табип-гериатры, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Рәшиҙә Йосоповаға - 70 йәш** (1953).

**24 -** математик, техник фәндәр докторы, ӨДНТУ профессоры, Башҡортостандың атҡаҙанған химигы, СССР уйлап табыусыһы **Тәлғәт Үмәрғәлинға - 75 йәш** (1948).

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы басҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# РӘХМӘТЛЕ ҠУЯНҒА НИ ЕТӘ!

***Лариса АБДУЛЛИНА, шағирә:*** Ҡуян атамалы йылда тыуғас, "Һин ҡуян йөрәкле арыҫланмы, әллә арыҫлан йөрәкле ҡуянмы?" тигән һорауҙы әле миңә йыш бирәләр. Эйе, йондоҙнамә буйынса арыҫлан булғас, был шаярыу ҡатыш һорауҙы ысын тип ҡабул итәм. Кешенең төрлө саҡтары була, шуға күрә бәндәләр һәр саҡ батырлыҡ ҡылып ҡына йөрөй икән, тип уйлау дөрөҫ түгел. Йәки, киреһенсә, һәр саҡ ҡурҡыу аҫтында ғына ла йәшәй алмай. Был йәһәттән миңә "Рәхмәтле ҡуян" тип аталған башҡорт халыҡ әкиәте бик оҡшай. Ошо ҡуяндай йомарт, изге асыллы булыу яғында мин. Ул бит ҡасандыр үҙенә эшләнгән игелекте йөрәк түрендә һаҡлап йөрөтөп, үҙенең ҡуян икәнен дә онотоп (ғәҙәттә, уларҙы әкиәттәрҙә ҡурҡаҡ тигән булалар), бөтә йәнлектәрҙе лә дуҫына ярҙамға саҡыра, һәм ана ниндәй һый-ниғмәт менән тултырып ҡуя улар был ауыл малайы йәшәгән өйҙөң табынын. Рәхмәтле була белергә кәрәк!

Был әкиәттә мин хатта халҡыбыҙҙың асылын күрәм. Нимә генә тимә, әкиәттә милли булмыш ныҡ сағыла ул. Башҡорт халҡы - яҡты хәтерле, башҡалар уға эшләгән яҡшылыҡты мәңге күңелендә йөрөткән милләт. Хәҙер инде быны бик күптәр менән аралашҡандан һуң айырым асыҡ миҫалдар килтереп әйтә алам. Эске бөтөнлөгө, инанысы ныҡ, нурлы, Аллаһ Тәғәләгә ышанысы һәм һөйөүе сикһеҙ булғандар ғына быңдай тойғоға эйә була ала. Улар башҡалар уға яҡшылыҡ эшләһен өсөн, йәки яҡшы булып күренәйем тип түгел, ә үҙҙәре яҡшылыҡтан торған өсөн яҡшылыҡ ҡыла. Беҙҙең халҡыбыҙҙың асылында - был мөҡәддәс хис. Урал олатабыҙҙан ҡалған васыят: "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, Кеше булһын затығыҙ!" Хоҙайыбыҙға ла рәхмәтле булайыҡ беҙҙе шундай нурлы милләттән яралтҡаны өсөн!

Әкиәттәрҙән дә күренеүенсә, ҡуян ғаиләһендә матур итеп, бер бөтөн булып йәшәргә ярата. Ул балаларына иғтибарлы. Шуға күрә киләһе йылда һәр кем үҙ ғаиләһендә, үҙенең эш мөхитендә, үҙ төбәгендә, үҙ илендә - үҙен уратып алған һәр ерҙә - татыулыҡ, берҙәмлек урынлаштырыуға өлөшөн индерер, тип өмөт итәм. Киләһе йылдың Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тарафынан "Фән һәм мәғрифәт йылы" тип иғлан ителеүен иҫәпкә алғанда, 2023 - ул мәғрифәтсе, һәр ерҙә нескә аҡыл, зирәклек менән еңеүсе ҡуян йылы булыр, тип ышанайыҡ.

## ӘЙҘӘГЕҘ!

# ЗАРЛАНМАЙ ЙӘШӘЙЕК!



**Яңы йылды һәр кеше ҙур өмөттәр менән ҡаршы ала. Минең дә өмөтөм ҙур уға. Иң мөһиме, Ер шарында тыныслыҡ урынлашһын. Илгә ҡайғы килмәһен, тип теләй торғайны элек өләсәйҙәр, быйыл барыбыҙ ҙа был һүҙҙәрҙең ни тиклем хаҡ икәненә төшөндөк.**

Көнсығыш календары буйынса ҡуян йылы килә. Мин дә ҡуян йылында тыуғанмын, ул бик әүҙем йәнлек, уға оҡшап, мин дә әүҙемлекте яратам. Ғөмүмән, ҡуян йыртҡыс йәнлек түгел, ул ҡаршылыҡтар булдырмау өсөн барыһын да эшләй, шуға ла тик яҡшыға юрайыҡ йылыбыҙҙы, көндәребеҙҙе.

Шәхсән һәр кемебеҙгә килгәндә, үтеп барған йылда булған ваҡиғаларҙы барлап, һығымталар яһап, ниндәйҙер кимәлдә хаталар өҫтөндә эшләп алыу ҙа зыян итмәҫ. Мәҫәлән, тормошто тик ыңғай яҡтан ҡабул итергә өйрәнәйек. Иртән уяндыңмы - яҡты көнгә, ҡояшҡа ҡыуан. Ашарға - ризығың, эсергә һыуың бар, шөкөр ит. Шылтыратыр, сер уртаҡлашыр, хәл белешер кешең бар икән, һин - бәхетле! Социаль селтәрҙәр аша түгел, йәнле итеп аралашыуҙарҙы кире тергеҙергә ине, быны һәр кем теләй, тимәк, ул теләктең тормошҡа ашыуына һәр кем булышлыҡ итһен.

Гел әйтә йөрөйөм: милләттәштәр, замандаштар, зарланмаҫҡа, мыжымаҫҡа тырышайыҡ! Ошоно үҙеңдә һынап ҡара әле: бер көн иртәнсәктән алып тик ыңғай уй уйлап ҡына йөрө. Тормош үҙе бар яҡшылыҡтарҙы алдыңа сығарып ҡуясаҡ. Үҙең үҙгәртә алмаған нәмәләр өсөн көс түкмә, ә үҙгәртә алғанын - кәйефеңде, холҡоңдо, тирә-йүнгә мөнәсәбәтеңде мотлаҡ үҙгәрт. Илағың килһә - ила, көлгөң килһә - көл, берәйһенән ғәфү үтенгең килһә, ғорурлыҡты ситкә ҡуйып, хәҙер үк ошо ғәмәлде башҡарып ҡуй. Онотмағыҙ, иң файҙалы һәм бер үк ваҡытта иң хәүефле ҡорал ул - һүҙ. Уның менән кешене ҡанатландырырға ла, рәнйетергә лә була.

Ер йөҙөндә рәхәтләнеп, изгелеккә генә кинәнеп йәшәргә яҙһын һәммәбеҙгә. Бына шул изгелекте үҙебеҙ тыуҙырабыҙ, шуны иҫтә тотайыҡсы.

**Шәһит ХАММАТОВ,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған артисы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин 2023 йылға минималь хеҙмәт хаҡын (МРОТ) 16 242 һум күләмендә билдәләгән законға ҡул ҡуйҙы. Шулай итеп, уны 6,3 процентҡа арттырыу ҡаралған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быйыл МРОТ-ты ике тапҡыр арттырҙылар: 1 ғинуарҙан ул - 13 890 һумға, ә 1 июндән 15 279 һумға еткерелде. Хәҙерге ваҡытта Башҡортостанда МРОТ (Урал коэффициенты менән) 17 571 һум тәшкил итә.

✓Яҙыусылар Гөлсирә Ғайсарова-Ғиззәтуллина һәм Айҙар Хөсәйенов Ф.Искәндәр исемендәге халыҡ-ара премия лауреаттары булды, тип хәбәр итә "Культура" гәзите. Жюри ҡарары 21 декабрҙә Рус ПЕН-үҙәгендә иғлан ителде. "Гөлсирә Ғиззәтуллинаның мин тәржемә иткән хикәйәләре абруйлы халыҡ-ара конкурста лайыҡлы юғары баһа алыуына бик шатмын. Бүләкләү көнөндә Боголюбов исемендәге китапханаға хәҙерге рус әҙәбиәте вәкилдәре йыйылды. Беҙ, башҡорт әҙиптәре, республикабыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе лайыҡлы күрһәттек", - тине яҙыусы, шағир һәм тәржемәсе Айҙар Хөсәйенов.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин йыл һайын 16 ноябрҙә илдә Самбо көнөн билдәләү тураһында указға ҡул ҡуйған. Самбо (үҙ-үҙеңде ҡоралһыҙ яҡлау) - 1930 йылдарҙа СССР-ҙа барлыҡҡа килгән спорт төрө. 1938 йылдың 16 ноябрендә СССР-ҙың Спорт советы самбоны илдә үҫешкән спорт төрҙәре иҫәбенә индергән.

✓Башҡортостанда палеолит дәүере һүрәттәре һаҡланған Шүлгәнташ мәмерйәһе биләмәһенең сиктәре раҫланды. Бөрйән районында урынлашҡан мәмерйә федераль әһәмиәттәге мәҙәни археологик мираҫ объекттары реестрына индерелгән. Шүлгәнташ республиканың төп иҫтәлекле урындарының береһе булып тора. 2022 йылдың йәйендә мәмерйәнән ике саҡрым алыҫлыҡта майҙаны 4 мең квадрат метрлыҡ ошо уҡ исемдәге тарихи-музей комплексы асылды.

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе ҡарары менән эшҡыуарҙарҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса вәкил Флүр Әсәҙуллиндың эшмәкәрлеге ваҡытынан алда туҡтатылды. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, үҙ теләге менән эшенән киткән омбудсменды Ирина Абрамова алмаштырыуы мөмкин. Әле ул - Башҡортостандың Социаль өлкә инновациялары үҙәге етәксеһе, Рәсәйҙең Йәмәғәт палатаһы ағзаһы.

ҠЫҪҠАСА

# ИҢ АЙЫҠ ТӨБӘК

**2022 йыл йомғаҡтары буйынса Волга буйы федераль округында "иң айыҡ" төбәктәр рейтингында Башҡортостан беренсе урынды биләй.** Икенсе урында - Һамар өлкәһе, өсөнсө, дүртенсе урындарҙы Мордовия һәм Татарстан алды. Рейтинг һөҙөмтәләре менән Дәүләт Думаһы депутаты, "Айыҡ Рәсәй" хәрәкәте лидеры Солтан Хәмзәев таныштырҙы. Республика Хөкүмәте булышлығында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ойошторған "Айыҡ ауыл" конкурсы ошо йәһәттән ҙур роль уйнаны. 2019 йылда беренсе конкурс иғлан ителгәнгә тиклем республика дөйөм рейтингта 32-31-се урында ине. 2021 йылда Башҡортостан 22-се урынға сыҡты, ә хәҙер 16-сы урынды яулап, илдең егерме айыҡ субъекты иҫәбенә инде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың приз фондын ҡырҡ тапҡырға - 1,5 миллиондан 40 миллионға тиклем арттырыуы конкурстың үҫешенә ҙур этәргес бирҙе.

✓ **Республиканың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажиндың "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында уҙған матбуғат конференцияһында Башҡортостан мәктәптәрендә кадрҙарға ҡытлыҡ мәсьәләһе ҡүтәрелде.** Министр һүҙҙәренсә, бөгөнгә тотош республикала 1500 уҡытыусы етешмәй. "Бигерәк тә ҡалала педагогтарға ҡытлыҡ ҙур. Өфөлә генә 200-гә яҡын башланғыс класс уҡытыусыһы кәрәк", - тине Айбулат Хажин. Педагогия университеты быйыл маҡсатлы йүнәлтмә буйынса 200 студентты ҡабул итте, юғары уҡыу йортонан һуң улар мотлаҡ мәктәпкә эшкә бара, тип билдәләне ведомство етәксеһе. Бынан тыш, Айбулат Хажин уҡытыусыларға ярҙам саралары хаҡында әйтте. Улар араһында - шифахана-курортта дауаланыуҙы кире ҡайтарыу, коммуналь түләүҙәр буйынса льготалар, хеҙмәт хаҡын ҡайтанан ҡарау.

✓ **Республика пенсионерҙары уҡыуға, спорт менән шөғөлләнеүгә йәки ял итеүгә сертификат алырға мөмкин. Быйыл Башҡортостанда һынау рәүешендә эшләй башлаған проект бик уңышлы булып сыҡты.** Ике айҙа 400-ҙән ашыу кешегә сертификат бирелгән, тип хәбәр итте республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова. Сертификаттың хаҡы - 2 мең һум. Уның менән йога, дауалау физкультураһы, тын алыу гимнастикаһы, бейеү, һанлы грамоталылыҡ, инглиз теле дәрестәре һәм башҡалар өсөн түләргә мөмкин. Ололар йүнәлеште үҙҙәре һайлай. Сертификат алыу өсөн ғариза менән республиканың халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге филиалдарына йәки күп функциялы үҙәктәргә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Сертификат өсөн бер нindәй ҙә өҫтәмә документтар талап ителмәй.

ЙЫЛДЫ БАРЛАП...

# РЕСПУБЛИКА БАШЛЫҒЫ ӘЙТТЕ!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Яңы йыл алдынан "Башинформ", Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һәм "Башҡортостан" ДТРК-һы журналистары һорауҙарына яуап бирҙе. Түбәндә гәзит уҡыусыларға ҡыҫҡаса төп мәлдәр менән танышырға тәҡдим итәбеҙ.**



## Йылдың иң мөһим ваҡиғаһы

● Республика халҡының берләшеүе. Быға ир-егеттәребеҙҙең ил һағына баҫыуы этәргес булды, ә республика уларҙың ғаиләләренә ярҙам саралары системаһын киң йәйелдерҙе. Беҙ кешеләрҙең ниндәй икәнен аңлай башланыҡ.

● Бер нисә ай инде Радий Хәбировты Донбасҡа күсерәләр икән, тигән имеш-мимештәр йөрөй. Был - ялған хәбәр, ул Башҡортостандан бер ҡайҙа ла китергә йыйынмай, әммә ил етәкселеге: "Радий Фәрит улы, шунда-шунда барып эшләгеҙ", - тиһә, бер һүҙһеҙ барасағын белдерҙе, сөнки ул хәрби түгел, граждан хеҙмәте хеҙмәткәре булһа ла, принциптар шул уҡ.

● Хәбировка АҠШ, Канада, Бөйөк Британия шәхси санкциялар иғлан итеүгә ҡарамаҫтан, был уға бер нисек тә йоғонто яһамай, сөнки уның сит илдә иҫәбе лә, активтары ла, күсемһеҙ милеге лә юҡ.

● Радий Хәбиров уға һәр саҡ махсус хәрби операция барышында һәләк булған егеттәрҙе һуңғы юлға оҙатырға барыуы ауыр булыуын белдерҙе, әммә матәм сараһына Республика Башлығы килә, яугирҙы барлыҡ хәрби шарттарға ярашлы ерләйҙәр икән, яҡындары һәм дуҫтары уның бушҡа һәләк булмағанлығын, Тыуған илен яҡлап башын һалғанлығын аңлай. Һәм был тойғо шәһиттәрҙең туғандарына саҡ ҡына булһа ла ярҙам итә.

● Һуңғы ваҡытта ғына беҙгә Донбастан 800-ҙән ашыу мәжбүри күсенеүсе килгән. Кемдер ваҡытлыса лагерҙарҙа, кемдер туғандарында йәшәй, күптәр эш тапҡан. "Минә улар беҙҙә яңы Ватанын табыр кеүек тойола", - ти Республика Башлығы.

● Радий Хәбировтың төп принциптарының береһе - ҡасандыр актер Сергей Бодров әйткән һүҙҙәр: "Һуғыш ваҡытында үҙеңдекеләр тураһында насар һөйләргә ярамай. Бер ваҡытта ла. Хатта улар хаҡ булмағанда ла". Бөгөн илгә һәм халыҡҡа ауыр, егеттәр Ватаныбыҙҙы һаҡлап һәләк була. Ындай ваҡытта арҡаға бысаҡ ҡаҙарға ярамай.

## 450 йыллыҡҡа ниндәй бүләк?

● Әгәр халыҡтың ихатаһында соҡор-саҡыр, бысраҡ булһа, хатта иң киң күләмле объект та бик ҡыуандырмаясаҡ. Шуға күрә ихаталарҙы төҙөкләндереү һәм подъездарҙы капиталь ремонтлау тәү сираттағы бурыс булып тора. Республика артабан да ихаталар, подъездар, скверҙар, парктар эшләүҙә дауам итәсәк.

● 2024 йылға Өфөнөң парктар системаһы тәртипкә килтереләсәк. Тиҙҙән Черниковкала тағы бер матур йөмәғәт киңлеге - Нефтехимиктар мәҙәниәт һәм ял паркы барлыҡҡа киләсәк, әммә республика Башлығының шәхси рейтингында тәүге урындарҙы "Кашҡаҙан", "Беренсе Май" һәм Бәләбәйҙәге "Йырлаусы фонтандар" алып тора.

● Баш ҡала юбилейына яңыртылған Пугачев урамына, ҡалаға Көнсығыш инеү юлына, Көрәш һарайына, фехтование, ишеү слаломы үҙәктәренә, ябыҡ футбол манежына, реконструкцияланған Ҡурсаҡ театрына әйә буласаҡбыҙ.

● Совет майҙанының исемен үҙгәртеү ихтыяжы юҡ. Бары тик ул артабан да төҙөкләндереләсәк, Совет урамында Октябрь революцияһы киҫелешенә тиклем фонарҙар ҡуйыласаҡ, визит-үҙәк төҙөләсәк, музейҙар һәм туристарҙы ылыҡтырырлыҡ башҡа нөктәләр булдырыласаҡ. Бынын

БАЙРАМ БЕҪҘӘ!

# ҠЫШ БАБАЙ МЕНӘН БЕРГӘ...

**Баш ҡалала Ҡыш бабай, Ҡарһылыу ҡатнашлығында театрлаштырылған тамашалар һәм уйын программалары уҙғарыла, ҡала, район майҙандарында шыршыларҙа уттар ҡабыҙыла.**

Өфөлә быйыл Яңы йыл байрамына арналған сараларҙың төп майҙаны - ул Ленин, Ҡунаҡһарай алдындағы майҙандар. Яңы йыл төнөндә Рус дәүләт академия драма театры алдында эстрада-күңел асыу программаһы ойошторола-саҡ, ул төнгө 11-се яртыла башланып таңғы 3-сө яртыға тиклем дауам итәсәк. Программала профессиональ артистарҙын, солистарҙың һәм художестволы үҙешмәкәр коллективтарының сығыштары ҡаралған. Ҡунаҡһарай алдындағы майҙанда байрам 31 декабрҙә киске сәғәт 10-да башлана. Ҡала халҡы һәм баш ҡала ҡунаҡтары өсөн бай программа әҙерләнгән: артистарҙың сағыу сығышы, Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыуҙың ҡотлауы, саф һауала интерактив уйындар. Сара төнгө 3-кә тиклем дауам итә. Бынан тыш, каникулдар мәлендә халыҡтың төп ял урыны булып боҙ ҡаласыҡтары, ял һәм мәҙәниәт парктары торасаҡ. Быйыл байрамға ағымдағы хәл-ваҡиғалар үҙ төҙәтмәһен дә индерә, шуға күрә байрам салюты булмаясаҡ. Шулай уҡ йыл-дағыса "TERRA ZIMA" фестивале үтәсәк. Уның сиктәрендә 1-3 ғинуарҙа төрлө киң күләмле мәҙәни һәм спорт саралары ойоштороласаҡ. 31 декабрҙән 1 ғинуарға ҡараған төндә Ағиҙел яры буйында төнгө сәғәт 2-гә тиклем Ҡыш бабай резиденцияһы эшләйәсәк, ә каникулдар ваҡытында - 14 ғинуарға тиклем уға көн һайын көндөҙгө 12-нән киске 9-ға тиклем килергә мөмкин. Балалар Ҡыш бабайға шиғыр һөйләй, шәхсән хат тапшыра һәм иҫтәлекҡә фотоға төшә ала. Уйын программалары һәр көн айырым бер темаға арналасаҡ. Резиденцияға инеү - бушлай.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Ҡыш бабай йорто үҙ эшен башланы. Был хаҡта социаль селтәрҙә баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев хәбәр итте. 2023 йылдың 14 ғинуарына тиклем көн һайын көндөҙгө сәғәт 12-нән киске 9-ға тиклем төп яңы йыл тылсымсыһы һәм уның командаһы Ағиҙел йылғаһы буйында ҡунаҡтар ҡаршылай. 31 декабрҙә иһә резиденция төнгө сәғәт 2-гә тиклем эшләй. Ҡыш бабайҙан тыш, ҡунаҡтарҙы унда тере болан, ҡыҙыҡлы интерактив программа һәм фотозона көтә.

✓Башҡортостанда Яңы йыл байрамдарына бәйле ғинуар айы өсөн пенсия ваҡытынан алда таратыла, тип хәбәр иттеләр Пенсия фондының республика буйынса бүлексәһендә. Һүҙ ғинуарҙың тәүге яртыһында пенсия алған пенсионерҙар хаҡында бара. Почта бүлексәләрендә пенсия алыусыларға ул график буйынса 2023 йылдың 3 ғинуарынан башлап таратыла. Аныҡ ваҡыты декабрь өсөн квитанцияла яҙылған.

✓Башҡортостанда быйыл барлығы 212 боҙ йәки ҡар тауы ҡуйылған, уларҙың 109-ы мотлаҡ дәүләт теркәүе үткән. Ҡар тауҙарының былтырғыға ҡарағанда биш тапҡырға кәмеүенә уларҙы ҡулланыуҙың яңы ҡағиҙәләре индерелеү сәбәпсе. Метр ярымдан бейегерәк булғандары аттракциондарға тиңләштерелә һәм мотлаҡ теркәү үтергә тейеш. Был яңылыҡ ҙур финанс сығымдары талап итә, ә муниципаль бюджеттарҙа ундай аҡса ҡаралмаған. Өфө ҡала хакимиәтендә белдереүҙәренсә, ҡала 10 сертификацияланған тау һатып алған. Улар баш ҡала һәм райондарҙың Яңы йыл ҡаласыҡтарында урынлаштырылған. Ҡулланыу мөҙҙәте - биш йыл.

✓Башҡортостан халҡы бала ҡараусы хеҙмәте менән ҡуллана ала, йәғни ата-әсәһе ниндәйҙер документтар артынан йөрөгәндә, поликлиникаға барғанда йәки башҡа мөһим эш менән шөғөлләнгәндә 3 йәшкә тиклем һәм сәләмәтлек мөмкинлеге сикләнгән 18 йәшкә тиклемгә балаларҙы махсус "няня"лар ҡарап торасаҡ. Улар аҙнаһына ике тапҡыр килә, сеанстың оҙайлығы - 3 сәғәт 15 минут. "Социаль бала ҡараусылар" тураһында ентеклерәк "Ғаилә" үҙәгенең 8-800-347-5000 берҙәм номеры буйынса һәм Башҡортостан халҡын социаль хеҙмәтләндереү республика үҙәге сайтында белешергә мөмкин.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

өсөн ошо майҙан эргәһендәге биналарҙа урынлашҡан министрлыҡтарҙы икенсе урынға күсерергә тура киләсәк. "Шулай уҡ республика халҡы менән майҙанда почетлы ҡарауыл кәрәкме, юҡмы икәнлеге тураһында кәңәшләшергә теләйем. Был илһөйәрлек тәрбиәләүҙә әһәмиәте ҙур булған матур йола", - ти Радий Хәбиров.

• Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялауҙы алда торған юбилей менән бәйләргә кәрәкмәй. Монумент - беҙҙең ғорурлыҡ һәм уны еренә еткереп эшләргә кәрәк, ә был ваҡыт һәм аҡса талап итә. Яҡынса баһалауҙар буйынса, һүҙ бер нисә йөҙ миллион һум тураһында бара.

• "Әр-Рәхим" йәмиғ мәсете 2026 йылдан да алда төҙөлеп бөтмәйәсәк. Төҙөлөштө тамамлау өсөн яҡынса дүрт миллиард һум бюджеттан тыш аҡса кәрәк, ә әлегә ундай күләм юҡ, барлыҡ аҡса хәрби хеҙмәткәрҙәргә һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙамға, иҡтисадты үҫтереүгә китә.

### Команда эшенә баһа

• Һуңғы йылдарҙа барыһы ла ҙур тиҙлектә, ғәҙәттән тыш режимда эшләнә. Ауырлыҡтар булһа ла, күп нәмәгә өлгәштек. Андрей Назаров - мин бергә эшләргә теләгән иң яҡшы премьер-министр, Хөкүмәттең барлыҡ ағзалары - намыҫлы кешеләр. Хакимиәт етәксеһе Максим Забелин - шәхси сифаттары буйынса беренсе кеше, миңә уның менән эшләү уңайлы. Өфө ҡалаһы мэры Ратмир Мәүлиев бик тырыша, әммә һынауҙы тулыһынса үтмәгән әле. Киләһе йылда яҙғыһын беҙ уның эшмәкәрлек арауығына баһа бирербеҙ. "Папкалы" башҡорттарҙың - төбәктән ситтә эшләгән республика вәкилдәренең эш һөҙөмтәлелеген тейешле кимәлдә түгел тип иҫәпләйем. РФ Дәүләт Думаһында беҙҙең ныҡлы депутат составы бар, әммә мин үҙемә лә, башҡаларға ла бик талапсан, шуға уларҙан күберәкте көтәм.

• Махсус хәрби операцияға киткән Азат Бадранов Хөкүмәттең беренсе вице-премьеры булып ҡала, уның урынын һәм кабинетын бирәү ҙә биләмәй. Вәкәләттәренең бер өлөшө тиҙҙән Луганскиҙан оҙайлы командировканан ҡайтасаҡ Башҡортостан Хөкүмәте Аппараты етәксеһе Азамат Абдрахманов үҙ иңенә аласаҡ.

### Поликлиникаларға сират - чиновниктарҙың эшләп еткермәүе

• Табипҡа яҙылыу буйынса ялыуҙар һәм поликлиникаларҙағы ҙур сират - чиновниктарҙың эшләп еткермәүе һәм миҙгел ауырыуҙарының ҡотороуы һөҙөмтәһе. "Мин кемделер әрләгәндән генә поликлиникалар киңәйеп, табиптар һаны биш һәм унан күберәк тапҡырға артып китмәйәсәк. Әммә ябай ғына ойоштороу мәлдәре бар - шылтыратып яҙылыу мөмкинлеген бирергә, пациенттарҙы шөмбе көнө лә ҡабул итә башларға кәрәк", - ти Радий Хәбиров.

### Тағы ла...

• Башҡортостан, бөтөн Рәсәй кеүек үк, игендән ҙур уңыш алды. 5,2 миллион тонна уңыш менән ғорурланырға була һәм кәрәк тә. Әммә ниндәй генә хәл-торошта ла республика йылына 4 миллион тоннанан да кәм булмаған иген йыйырға тейеш, ә уңышты һаҡлау һәм эшкәртеү өсөн талап ителгән комплекстарҙы әүҙемерәк төҙөргә кәрәк.

• Әлегерәк беҙ йылына 10 мәктәпте ремонтлай инек, хәҙер был һан, ҡайһы бер урындарға ваҡыт оҙағыраҡҡа һуҙылһа ла, 63-кә етте. Киләһе йылда 77 мәктәп ремонтланасаҡ һәм әле үк 2024-2025 йылдарға заявкалар ҡабул ителә.

• Шишмә районында төҙөләсәк Күсмән халыҡтар цивилизацияһы музейында кәсепселек ауылын асыу планлаштырыла, ул күсмәндәрҙең көнкүрешен һәм шөғөлдәрен сағылдырырға тейеш. Шулай уҡ ипподром, спорт ярыштары, ял урындары зоналарын булдырыу күҙаллана. XIV-XV быуаттарҙағы Түрәхан кәшәнәһе төп объект буласаҡ.

• Республика Башлығы "Батырҙар ярышы" өсөн ҡаршылыҡ һыҙаты булған "Патриот" паркы менән ғорурлана. Унда бөтә республиканан өлкән синыф егеттәре килә. "Балалар түгел, ә ысын ирҙәр тора. Беҙ уларҙың мейеһенә "һалабыҙ", йөрәктәренә үтеп инергә тырышабыҙ. Парк республика өсөн бик ваҡытлы барлыҡҡа килде", - ти Радий Хәбиров.

• Радий Хәбиров Башҡортостандың беренсе Президенты менән аралашыуын дауам итә, даими рәүештә уға бара һәм, ғөмүмән, Мортаза Ғөбәйҙулла улына тәрән ихтирамлы мөнәсәбәттә.

• Үҙенең көс сығанағы тип республика Башлығы оятҡа ҡалыуҙан ҡурҡыуын һанай. "Малай ғына саҡта атаәсәйемде оятҡа ҡалдырыуҙан ҡурҡтым. Хәҙер миңә ышанған халыҡтың ышанысын аҡламаҫмын тип ҡурҡам. Исемем менән ғорурланам һәм балаларыма, ҡатыныма минең өсөн оят булыуын теләмәйем. Быны минең төп көс сығанағым", - ти ул.

• Яңы йылды Хәбировтар ғаиләһе барыһы бергә өйҙә ҡаршылаясаҡ. Йылға йомғаҡ яһаясаҡтар, бер-береһенә бүләктәр бирәсәктәр, һуңынан Совет майҙанына сығасаҡтар. График тығыҙ булыу һөҙөмтәһендә уның балаларына ваҡыты бик аҙ ҡала. Бөлкәйе уны саф башҡортса "атай" тип ҡаршылай, олоһо - Фәрит менән ул, уның йәшенә ҡарамаҫтан, бөтөн нәмә тураһында һөйләшә.

**Станислав ШАХОВ**
**әҙерләне.**

## ҮҘЕБЕҘҘЕҢ РИЗЫҠ

**Өфөлә, шулай уҡ бөтөн Башҡортостанда Яңы йыл алдынан ҙур ауыл хужалығы йәрминкәләре үтә. Унда яңы йыл өҫтәленә фермер хужалыҡтарында үҫтерелгән ҡаҙ, өйрәк, күркә, шулай уҡ өй шарттарында әҙерләнгән тоҙло ҡыяр, кәбеҫтә алырға мөмкин.**

Билдәле булыуынса, хәҙер республикала урамда сауҙа итеүгә рөхсәт бирелде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса республика ҡалаларында һәм райондарында һатыу урындары булдырылған, унда теләгән һәр кем үҙенең баҡсаһында үҫтергәнде һата ала. Республика Башлығы "өләсәйҙәрҙе эҙәрлекләүҙе" туҡтатыу тураһында әйтте. Уның фекеренсә, баҡсасылыҡ продукцияһын һатыу урындарын арттырыу мөһим. Әле республикала яҡынса 3,7 мең нөктә бар. Ябыҡ прилавкалар баҡсасыларға бушлай бирелә. Бындай һатыу майҙанының иң күбеһе Өфөлә, Стәрлетамаҡта һәм Бөрө районында. Бөгөн баш ҡалала ауыл хужалығы һәм тематик йәрминкәләр ойоштороу өсөн 11 майҙан булдырылған. Фермерлыҡ продукцияһын һатыуға өҫтәмә рәүештә 9 урын билдәләнгән. Унда ял көндәрен көтмәйенсә, фермерҙар йыл әйләнәһенә үҙ продукцияһын һата ала. Бынан тыш, баҡсасылар өсөн 576 урынлыҡ 35 түләүһеҙ майҙансыҡ эшләй. Кеше күп йөрөгән ерҙә 137 урынлыҡ 17 майҙан бар. Мониторинг күрһәтеүенсә, ундағы хаҡтар Өфө магазиндарына ҡарағанда уртаса 10 процентҡа арзаныраҡ. 2022 йылда ял көндәрендә 400-гә яҡын йәрминкә үткәрелгән, унда яҡынса 4,2 мең тонна продукция һатылған, шуның араһында картуф, йәшелсә, ит, бал, ҡош ите ҙур һорау менән файҙаланған. Көҙгө ауыл хужалығы йәрминкәһендә генә 208 мең өфөлө ҡатнашҡан.

Ял көнөндә үткәрелгән ит йәрминкәләре яңы йылда ғинуар аҙағынан мартҡа тиклем дауам итәсәк.

## ҠЫҪҠАСА

# БАРЫҺЫ ЛА БАЛАЛАР ӨСӨН

**Башҡортостанда биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән 30 ҡатын-ҡыҙ "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнә.** Башҡортостан Башлығының тейешле указы рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Бүләкләнеүселәр араһында - Баймаҡ, Балтас, Белорет, Бишбүләк, Бәләбәй, Бөрө, Бөрйән, Дәүләкән, Дыуан, Ишембай, Ҡыйғы, Мәләүез, Мәсетле, Стәрлетамаҡ, Учалы, Саҡмағош райондарынан, Нефтекама, Күмертау һәм Өфө ҡалаларынан әсәләр бар. Миҙал 1998 йылда булдырылған. Ошо йылдар эсендә уға һигеҙ меңдән ашыу әсә лайыҡ булған. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнгән күп балалы әсәләргә бер тапҡыр 50 мең һум аҡса түләнә.

✓ **Башҡортостанда етем балаларға пособиелар 10 процентҡа индексацияланасаҡ, тип хәбәр иттеләр республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәтенән.** Депутаттар ошо арала 2005 йылдың 28 декабрендәге "Опекундарға (попечителдәргә) бала ҡарауға аҡса түләү тәртибе һәм күләме тураһында" республика законына тейешле үҙгәрештәр индерергә йыйына. "Закон проекты 2023 йылдың 1 ғинуарынан етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы ҡарау өсөн айлыҡ пособиелар күләмен 10 процентҡа арттырырға тәҡдим итә, - тине Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев. - Быйыл пособиелар арттырылманы, бынан алдараҡ индексация 4 процент кимәлендә башҡарылды". Республиканың Хеҙмәт министрлығы хәбәр итеүенсә, пособие өс йәшкә тиклемге сабыйға - 7 143 һумдан 7 857 һумғаса, өс йәше тулғандарға иһә 6 868 һумдан 7 555 һумғаса арттырыла. Үҫеш яғынан артта ҡалған балаларға пособиелар ҙа 10 процентҡа индексацияланасаҡ.

✓ **Өфө ҡалаһында ауыр тормош шарттарында ҡалған ғаиләләр өсөн "Ғаилә компасы" тип аталған социаль проект уңышлы ғәмәлгә ашырылып килә.** Ул ғаиләләргә сәләмәт мөнәсәбәттәрҙе һәм балаларҙы именлек мөхитендә тәрбиәләүҙе тәьмин итеүгә йүнәлтелгән. 2022 йылда был проект Ауыр тормош шарттарында ҡалған балаларҙы яҡлау фонды грантына лайыҡ булды һәм 237 ғаиләнән 433 бала менән маҡсатлы эш ойошторолдо. Был эш 2023 йылдың 31 октябренә тиклем дауам итә. "Өфөнөң бала хоҡуҡтарын яҡлау өлкәһе белгестәре баланы үҙ атай-әсәһе ҡулында тәрбиәләү мөһим булыуын яҡшы аңлай. Махсус хеҙмәт кешеләре ата-әсәләрҙе ғәҙәти йәшәү рәүешенә ҡайтарыу, уларҙың балаға ҡарата мөнәсәбәтен яҡшыртыу, лайыҡлы тормош, тәрбиә һәм үҫеш шарттары булдырыу буйынса эш алып бара. Шулай уҡ ата-әсә хоҡуғын тергеҙеп, балаларын ғаиләгә ҡайтарыусыларға ярҙам итәбеҙ", - ти Өфөнөң опека һәм попечителлек идаралығы етәксеһе Илнара Сатаева.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һалҡын тейһә

❖ Берәр әфлисун һәм лимонды ағып торған һыуҙа йыуырға ла, ҡабығы менән бергә ит турағыстан үткәрергә. Сәмалап шәкәр ҡушырға һәм яҡшылап болғатырға. Һыуыткыста һаҡларға. Дауаны ризыкланырҙан 15-20 минут алда көнөнә 3 тапҡыр берәр балғалаҡ ашарға. Был иммунитетты нығыта, шуға йыл әйләнәһенә даими ҡулланыу кәңәш ителә.

❖ Тымау йәки һалҡын тейеүен һиҙгәс тә табандарға горчичник ҡуйырға кәрәк. Өҫтөн ҡаплап, йөн ойоҡтар кейеп, мөмкин тиклем ваҡыт торорға. Шунан алып ташлап, тиҙ-тиҙ атлап йөрөп алырға. Был рәүешле йоҡларға ятырҙан алда дауаланыу отошло.

❖ Һалҡын тейеүен һиҙгәс тә 0,5 литр һөттө йылымыслатып, шуға йомортҡа һытып өҫтәргә. Берәр балғалаҡ аҡ май һәм бал ҡушырға. Яҡшылап болғатырға һәм төнгөләккә эсеп ятырға. Иртәнсәккә хәлһеҙлек һәм тымау үтәсәк.

### Ғүмерҙе оҙайтыусы турама

❖ Ғүмерҙе оҙайтырға ярҙам иткән салатҡа тәү сиратта сельдерей, йыуа, укроп, петрушканы турап һалырға. Шунан помидор йәки ҡыяр һәм ҡыҙыл болгар боросон ҡушырға. Ҡырғыстан үткәрелгән сөгөлдөр, кишер, туралған Пекин кәбеҫтәһен (1:2:1) турарға. Шунан редис турап өҫтәргә. Барыһын да керамика һауытҡа һалырға, бер бүлкә лимон һутын һығырға һәм бутарға. Алдан әҙерләп ҡуйылған ярты һауыт диңгеҙ кәбеҫтәһен салатҡа ҡушырға. Төйөлгән дәрсен (корица), куркума, етен һәм укроптың киптерелгән орлоҡтарын яртышар балғалаҡ самаһы һибергә. Оҡшаһа, бер бүлкә һарымһаҡ ҡушырға. Көнбағыш һәм кукуруз майҙарын ҡушып бутағандан һуң, тураманы 1 сәғәткә ултыртып ҡуйырға. Был тураманы төшкө сәғәт 1-ҙән 4-кә тиклем ашарға. Файҙалы ризыҡ токсиндарҙы сығара, ҡан, бөйөр, бауырҙы таҙарта, хәтерҙе, капиллярҙарҙы һәм баш мейеһенә ҡан йөрөшөн яҡшырта, нервы системаһын нығыта. Ашҡаҙан-эсәк юлдарын да таҙарта, эшмәкәрлеген көйләй.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА**
**әҙерләне.**

**✓ Уларҙың, ғәҙәттәгесә, уҡ-һаҙаҡтары, һөңгөләре һәм һуғыш балталары бар. Уларҙа барса әйберҙәр алтындан һәм баҡырҙан. Әммә һөңгөләренең, уҡ башаҡтарының һәм һуғыш балталарының барса металл өлөштәрен баҡырҙан яһайҙар.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы



Дах-массагеттарҙың мәҙәниәтен тулыраҡ күҙ алдына килтереү өсөн антик дәүер тарихсылары мәғлүмәттәре мөһим сығанаҡ булып тора. Массагеттарҙың тормошо һәм әхлаҡи һыҙаттары хаҡында Геродот шулай тип яҙа: "Массагеттар скифтарҙыҡына оҡшаш кейем кейә һәм шундай уҡ йәшәү рәүешен алып бара. Улар аттарҙа һәм йәйәүле стройҙа һуғыша (тегеләй ҙә, былай ҙа). Уларҙың, ғәҙәттәгесә, уҡ-һаҙаҡтары, һөңгөләре һәм һуғыш балталары бар. Уларҙа барса әйберҙәр алтындан һәм баҡырҙан. Әммә һөңгөләренең, уҡ башаҡтарының һәм һуғыш балталарының барса металл өлөштәрен баҡырҙан яһайҙар, ә баш кейемдәрен, билбауҙарын һәм бәйҙәрен алтын менән биҙәйҙәр. Шулай уҡ аттарына баҡыр панцирҙар кейҙерәләр, түшелдерек һымаҡ. Теҙгендәрен, ауыҙлыҡтарын һәм яңаҡ ҡаплағыстарын алтын менән инкрустациялайҙар... Алтын һәм баҡыр унда бик күп".

Дах-массагеттар үҙҙәренең вафат булған ырыуҙаштарын ерләү өсөн төрлө формалағы ҡәберҙәр ҡаҙыған. Улар араһында тәрән һәм тар булғандары һаны буйынса өҫтөнлөк итә. Ошондай ҡәберҙәрҙең ҡайһыларында уларҙың оҙон стеналары буйында һәм мөйөштәрендә ҡәбер бейеклегендәге бағаналар ҡуйылған (Иҫке Ҡыйышҡы). Был бағаналар, күрәһең, ағас стеналарға һәм ҡәберҙең өҫкө япмаһына терәк булған: уларға ике яҡлы япманың арҡыры өрләктәре һалынған булыуын күҙалларға була. Көньяҡ Уралда ошондай типтағы ҡәбер эсе ҡоролмаларының андронов мәҙәниәте ҡомартҡыларында уҡ тәүләп теркәлеүе билдәле.

Әле бәйән ителгәндәренән тыш, ҡурғандарҙа мәйеттең тар ғына соҡор рәүешендәге ҡәберҙең бер яғындағы стенаһына өңөләп яһалған уйымға ерләнеү осраҡтары бар. Ҡайһы берҙә ҡәберҙәрҙең ҡабырға яғындағы стеналарындағы уйымдар шул тиклем киң һәм тәрән булып, катакомба формаһына оҡшап китә. Инеү урындары эскә табан тәрәнәйә барған тар һәм оҙон коридор-дромостарҙан хасил булған тәрән һәм киң ҡәбер соҡорҙары күпкә ҡатмарлыраҡ булып күҙаллана. Ҡәбер эсе бүрәнә менән буралып, коридорының да, ҡәберҙән үҙенең дә өҫкө яҡтан күп рәтле бүрәнә ҡатламы менән ябылыуы мөмкин булған.

Айырыуса затлы кешеләрҙең ҡәберҙәре өҫтөнә ҡатмарлы конструкциялы бүрәнә ҡоролмалар һалынған. Үлсәмдәре буйынса ябай ҡәбер соҡоронан бер нисә тапҡыр ҙурыраҡ булған бүрәнә буралар киң таралған була. Уларҙың стеналары мөйөштәрҙә парлап ҡуйылған йыуан бағаналар менән нығытылған. Ошондай бер нисә ҡоролма Ырымбур яҡтарында тикшерелә (мәҫәлән, I Пятимары), әммә һуңынан уларҙың Көньяҡ Уралда һәр яҡта ла тәҙөләүе асыҡлана. Көньяҡ Уралдың Арал буйы күскенселәре (сактар) мәҙәниәте һыҙаттарын асыҡ сағылдырған, б.э. тиклем VI-V быуаттарға ҡараған ҡомартҡыларын Силәбе өлкәһендәге Маровый шляхһәм Солончанка II ҡурғандары тулыландырҙы.

Әлмөхәмәт ҡурғанында (Әбйәлил районы) тағы ла ҡатмарлыраҡ ҡоролма булыуы асыҡланды: ул тышҡы (8х7 м) һәм эске (6х4 м) буралар-ҙан хасил булған. Барса осраҡтарҙа ла ҡәбер өҫтөндәге буралар өҫкө яҡтан бүрәнә теҙмәһе (бәлки, күп рәтле?) менән ябылған. Сатыр рәүешендәге бүрәнә ҡоролмалар булыуы ла теркәлгән. Бүрәнә япмаһы өҫтөнә киҫелгән ағастарҙың ботаҡтары түшәлгән, шунан һуң ер өйөмө һалынған, ҡайһы саҡта уға таш та ҡушылған. Таш йышыраҡ ҡурған нигеҙен ҡаймалап ҡуйыу йә иһә өҫкө яҡтан уны тулыһынса ҡаплау өсөн ҡулланылған. Ҡәбер өҫтөндәге бүрәнә менән ябылған бура кеүек ҡоролмалар тик Көньяҡ Уралға ғына хас күренеш түгел. Сактарҙың ошондай ҡоролмалары, мәҫәлән, Ҡаҙағстандың көньяғында (Бесшатыр ҡурғандары) табылған, ә уларҙың иң иртә аналогы сифатында Тываның Аржан ҡурғанын атап була.

Ҡәберҙең формаһын, уның эсендәге ҡоролмаларҙы һайлау үлгән кешенең байлыҡ кимәле менән бәйле һәм уның ижтимағи характерҙа булыуы асыҡ сағылып таба: кеше ни тиклем байыраҡ була һәм ни ҡәҙәрле юғары ижтимағи баҫҡыста тора, уға шул тиклем ҡатмарлыраҡ һәм күп хеҙмәт талап иткән ҡурған теҙәлә.

Үлгәндәрҙе ерләгәндә дахмассагеттар уларҙың баш остарына аттарҙы ҡүмеп ҡалдырыу ритуалын да башҡарған. Мәҫәлән, Пятимары ҡурғанында затлы кешенең ҡәбере янында ҡорбанға салынған 5 ат ҡәүҙәһе ҡүмелгән; тегедонъяла аттарҙы ҡарау һәм хужаһына хеҙмәт итеү өсөн уның янына үлтерелгән ике йән һаҡсыһы ерләнгән. Ҡурғандарҙа аттың башы, тиреһе һәм дүрт һаны рәүешендәге ритуаль ерләү ҡалдыҡтары табылыуы ҡәҙимге күренеш. Ҡәбер аҙығы сифатында ҡуйите һалынған, быға һарыҡтарҙың башһыҙ ҡәүҙәләренең һәм башҡа өлөштәренең ҡалдыҡтары булыуы дәлил.

Б.э. тиклем VII - V быуаттарға ҡараған ҡурғандарҙа Евразия күскенселәре мәҙәниәте өсөн ғәҙәти булған тимер хәнйәрҙәр - акинак-ҡылыс тип нарыҡланған ҡоралдар, ҙур булмаған тимер йәиһә баҡыр уҡ башаҡтары осрай. Уҡтар туҙ йә иһә күн һаҙаҡтарға һалып йөрөтөлгән, ҡаҙыу эштәре барышында уларҙың ҡалдыҡтары йыш теркәлә. Бер осраҡта (Ырымбур өлкәһендәге Троицкий ҡурғаны) өс секциянан торған күн һаҙаҡ табылған, уларҙың һәр береһендә төрлө үлсәмле уҡтарҙың бронза башаҡтары һаҡланған.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

Был саҡта беҙҙең 58-се гв. атлы полкына ярҙамға 60-сы һәм 62-се гв. полктары ла сығып өлгөргәйне. Полктарҙың 45 миллиметрлы орудие батареялары, 82 миллиметрлы миномет взводтары ла һөжүмгә әҙер тора. 28 сентябрь иртәһендә дөйөм һөжүм башлана. 60-сы полк Нивки ауылының төньяҡ, 58-се полк көньяҡ ҡырыйы яғынан атакаға күтәрелә. 62-се полк Певни утары йүнәлешендә хәрәкәт итә. Бында немецтарҙың терәк оборона пункты булыуы хаҡында беҙҙең разведка алдан уҡ дивизия командованиеһына мәғлүмәт еткергән була. Етмәһә, дошман үҙенең резервынан ашығыс рәүештә техникаһын һәм яңы подразделениеларын килтерә башлай. Яугирҙарыбыҙға әле аталған ауылдарҙы штурм менән азат итергә тура килә. Дошман да тик окоптарында ғына ятмай - әленән-әле контратакаға ташлана, беҙҙең яугирҙар билгән позицияларҙы бер туҡтауһыҙ орудие һәм миномет утына тота. Йыш ҡына, дошман һалдаттары менән йөҙгә-йөҙ килеп, ҡул һуғышында ғына уларҙы ҡаҡшатып була ине. Гвардиясылар бында ла ҡаһармандарса һуғышты, дошманды аяуһыҙ ҡырҙы. Мәҫәлән, Таһир Күсимов полкының 1-се эскадроны пулеметсыһы, рядовой Яков Антошин (Горький ҡалаһынан), дошманды эҙәрлекләп барып, Нивки ауылының иң ситтәге урамына килеп инә. Шул саҡта немецтар контратакаға ташлана. Антошин баҙап ҡалмай, йәһәт кенә бер өй сарҙағына менеп, юғарынан йүгерешеп килеүсе немец һалдаттарын үҙенең ҡул пулеметы утына тота. Зәһәре сыҡҡан дошман һалдаттары уны әсиргә алырға иҫәп тота. Әммә батыр яугир, уларҙың өй янына уҡ килеп еткәнен аңдып тороп, өҫтәренә бер нисә граната ташлай. Шыуышып барып, өй янына икенсе яҡтан килеп еткән фашистар өйҙө яндырып ебәрә. Сарҙаҡтан аҫҡа төшкән Антошин немецтарға тәҙрә аша ут аса. Яраланған, кейеменә ут ҡабып, тәне лә бешкән яугир пулемет дискыларын аурлыҡ менән алмаштыра, ул тамам хәлдән тая. Ярҙамға килеп еткән яуҙаштары уны янып торған өйҙән алып сыға. Яков Антошин иҫән ҡала.

58-се гв. атлы полкының ҡылыссылар взводы командиры ярҙамсыһы, өлкән сержант Михаил Нагорный (Украинаның Херсон өлкәһе Фирсовка ауылынан) Днепрҙың уң ярында яуҙаштары менән немецтарҙың ике атакаһын кире ҡаға. Уның взводы Нивки ауылы өсөн алышта ла һис һыр бирмәй, һан яғынан күпкә өҫтөн булған дошман контратакаларына ҡаршы тора, артҡа сигенмәй. Немецтар бар яҡтан да уратып алғас, тиҙ арала окоптар ҡаҙып, оборона тота. Батыр яугирҙар сәғәт буйына өҫтәренә ҡара яу булып килгән дошман атакаларын бер-бер артлы кире ҡағып, һуңғы сиктә ҡул һуғышына күсә, улар тәрән атып та, штыктары менән дә 30-ға яҡын дошман һалдатын юҡ итә. Взвод командиры вазифаһын башҡарған Нагорный яуҙаштарын ҡамауҙан алып сыға. Бөйөк Ватан һуғышынан имен-аман ҡайта, тыуған яғында йәшәй.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

---

ала, ҡалғандары ҡасып китә. Шуға ла ул ауылға йүгереп ҡайтып: "Яланда йөҙ ҡуян ултыра, атып алайыҡ", - тип йәүкәләп һунарсылар алып килгән. Күмәкләп ятып атып ебәрһәләр, ҡылған баштарындағы ҡырпаҡ ҡарҙар ғына һелкенгән. "Йөҙ ҡуян" лаҡабы ана шунан килә.

Ҡыҫҡаһы, беҙ Үтәбайҙар "Ҡуян йылы" килеүен, үҙебеҙҙең йылды оло түҙемһеҙлек менән көтөп алдыҡ. Беҙҙең йылға рәхим итегеҙ! Үҙ йылыбыҙҙы, бигерәк тә ошо йылда тыуыусыларҙы нығыраҡ яратабыҙ!

## Икенсе һүҙ: "Ҡуян ат, һырлы сана"

Ул көнгә тиклем сөннәтләнгән ағайҙарҙың ыштанһыҙ көйгә оҙон күлдәк кейеп, аяҡтарын кирә баҫып, ауыл урамында тәлкән-тәлкән атлап йөрөгәнен күреп, үҙҙәрен "баба-баба" тип үсекләп, көлә торғайныҡ. Әммә, көлә килә, артынан һөрә килә, тигәндәй, бер көн килеп, сират беҙгә лә етте. Йәй башының матур бер көнөндә "Ауылға баба килгән", тигән һүҙ таралғас, беҙҙең, 4-5 йәш араһындағы тиҫтерҙәрҙең, йөрәге жыу итеп ҡалды. Йылғырыраҡ, зирәгерәк малайҙар ауыл янындағы урманға ҡасып өлгөрҙө. Улар баба өйҙән-өйгә йөрөп, үҙ эшен бөтөргәндән һуң ғына, кисләтеп кенә өйҙәренә ҡайта алды. Ҡайһылары йыл һайын ауылға килгән бабанан ҡаса торғас, бөтөнләй сөннәтһеҙ тороп ҡалды. Бер нисә йылдан сөннәтсе бабаның үлеп ҡалыуы хаҡында ишеттек һәм беҙҙән һуң донъяға килгән бер нисә быуын малайҙары сөннәтһеҙ ҡалды, уның ни икәнен дә белмәй үҫте.

Ә беҙ эләктек. Һаман да иҫемдә. Баба тигән кешенең беҙҙең өйгә килеп ингәне, мине сәсемдән һыйпағаны, "Көҙ көнө улыма ҡуян ат, һырлы сана алып киләм, егеп йөрөрһөң", - тип әйткәне. Бигерәк хикмәтле, серле, әкиәттәгесә тылсымлы ине шул бабаның "ҡуян ат, һырлы сана", тигәне. Уның "ҡуян ат" тигәнен аңланым да кеүек, ә бына "һырлы сана" тигәне нисегерәк икән?

Шул хаҡта хыялланып та өлгөрмәнем... "сем" итеп ҡалды. Уның ҡарауы, "ҡуян ат, һырлы сана" хаҡындағы татлы хыял барыһынан да көслөрәк булып сыҡты. Һәр хәлдә, ул саҡтағы ауыртыныу татлы иҫтәлек кенә булып хәтергә уйылған. "Ҡуян ат, һырлы сана" тигәндең хикмәте лә тап ошондалыр, күрәһең.

Үҫә килә, шуға ла иғтибар иттек: өлкәндәр, ниңәлер, сөннәткә ултыртылғандарға күп кенә яуаплы эштәрҙе ышанып тапшыра, ниңәлер сөннәтһеҙ кешегә ҡулы йыуылмаған кешегә ҡараған һымаҡ ҡарай. Сөннәтһеҙҙән икмәк телдермәйҙәр, мал салдырмайҙар, мәрхүмдәрҙе йыуыуҙан да мәхрүм сөннәтһеҙҙәр. Ниңәлер, уларҙың ҡулы менән башҡарылған ғәмәлде "хәрәм" тип баһалау йәшәй беҙҙең яҡта. "Сөннәтһеҙҙән ҡәнәш һорама!" - тип тә әйтәләр хатта...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡуян атҡа һырлы саналар егеп йөрөүҙең ананиндәй әһәмиәте бар икән дә. Быны беҙ ҡуян заттары нығыраҡ беләбеҙ. Хәҙер уйлап ҡараһаң, ауылыбыҙға килеп, малайҙарҙы сөннәтләп йөрөүсе бабаларҙың ниндәй мөһим һәм зарури ғәмәл башҡарып йөрөгәндәрен аңлайһың. Барыһы ла илдең һәм милләттең һаулығы өсөн булған. Ҡуян ат егелгән һырлы сана ултырып елеүсе 4-5 йәшлек малайҙарҙы күҙ алдына килтерһәң, донъя яҡтырып китә, күңелдә мөғжизәле әкиәт ярала...**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**Күптәр уны Башҡортостан Ҡыш бабайҙарының береһе тип белә. Үҙе әйтмешләй, бабай ҡарт булғас, республикала уны, башҡа Ҡыш бабайҙар кеүек үк, урынбаҫар итеп тәғәйенләгән. Шуға Яңы йыл етә башлаһа, ул арҡаһына бүләктәр менән тулы ҙуур тоғон аҫып, ейәнсәрен - Ҡарһылыуҙы етәкләп, балаларҙы ғына түгел, уларҙың ата-әсәһен ҡыуандырыу маршрутына сыға. Быйыл уның юлына саҡ ҡына үҙгәрештәр индереп, редакциябыҙға саҡырҙыҡ, сөнки ул беҙгә етеп килгән Ҡуян йылында тыуған. Һүҙ - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы Хәким МОРТАЗИНға.**

▸ **Һеҙ ҡуян йылында тыуғанһығыҙ, ә был йән эйәһе тураһында, ғәҙәттә, "ҡурҡаҡ ҡуян", "ҡуян йөрәк" тигән сағыштырыуҙарға күнеккәнбеҙ. Алыптай кәүҙәле Хәким Мортазин ниндәй ҡуян икән?**

- Ҡуян йылы ла тибеҙ, Бесәй йылы ла тиҙәр. Ҡуян шеш ҡолаҡ бит инде ул, бөтөн нәмәне алдан тоя, бесәй ҙә шулай уҡ тирә-яҡты ныҡ тойоусы хайуан. Минең дә алдан тойомлай торған ғәҙәтем бар һәм шуға үҙемде ҡурҡаҡ тимәҫ инем, әммә бик һаҡ, хәйләкәрмендер, тип уйлайым. Шулай ҙа күберәк бесәймендер тим, сөнки уны нисек кенә, ҡайҙан ғына ырғытма, ул барыбер ергә аяғына килеп төшә. Өйҙә ҡатыным да "чеширский кот" тип йөрөтә, юҡҡа түгелдер инде.

Ҡуян шулай уҡ бик һаҡсыл, үҙен юҡ-барға йәберләтергә лә юл ҡуймай. Мәҫәлән, беҙ яратып ҡараған "Ну, погоди" йәнһүрәтендә ул бүрене нисек кенә төп башына ултыртмай, шул уҡ ваҡытта үҙе һәр саҡ ҡуян китеп барған еренән туҡтаған да, тынысланып, иркенләп ултырып алған. Ултырыуы булған, һунарсы уны атып та алған. Быны ағас башынан күҙәтеп ултырған ҡарға: "Үәт иҫәр, юҡты бушҡа ауҙарып өсөн өҫтә ултырырға кәрәк!" - тип уфтанып ҡуйған, ти...

▸ **Халыҡта шундай ғәҙәт бар - кешегә ҡушамат тағыу. Был бигерәк тә башҡорттарҙа киң таралған һәм уны бәрәү ҙә кәмһетеү тип ҡарамай, киреһенсә, ҡушаматын ҡабул итеүселәрҙә юмор хисе бар, тип баһалана. Һеҙгә, Ҡуян йылында тыуғас, ҡуянға бәйле, мәҫәлән, "ата ҡуян", "үргүян" кеүегерәк ҡушамат таҡманылармы? Ғөмүмән, ниндәй ҡушаматығыҙ булды?**

- Мин үҙебеҙҙән яҡ һөйләше буйынса, үрғүяныңа оҡшағанмындыр инде ул. Нимәгә үргүян тиҙәр, ул ябай ҡыр ҡуяндарына ҡарағанда ҙурыраҡ, үҙенсә олпатыраҡ инде. Бәләкәй саҡта улай ҡуянға бәйле исем таҡманылар, әммә ҡушаматтарым күп кенә ул. Каланча, һонтор, күсәк һәм башҡалар. Театрға килгәс, бында 1997 йылдан бирле эшләйем, тағы бер бик матур ҡушамат таҡтылар, үҙемә бик нык оҡшай. Коллегаларым өсөн мин - "бәпес" (малыш).

▸ **Шәп ҡушамат! Коллегаларығыҙ шундай ҡушамат биргәс, тимәк, һеҙҙең күңелегеҙҙә һаман бала йәшәй һәм улар ҙа шуны күрә, тоя...**

- Дөрөҫөн әйткәндә, һәр кемдең күңелендә бала йәшәй, уны бер нисек сығарып бөтөрөп булмай, кәрәкмәй ҙә. Бары тик бәғзеләр ошо күңелендәге баланы бaсырып, үҙендә йомоп ҡалдыра, олоғайыу битлеге артына йәшерә, сөнки олоғайыуҙы дәрәжәгә һанайҙар. Ҡайһы берәүҙәр, бигерәк тә ижад кешеләре өсөн был - ысынбарлыҡ, саф сифат. Әгәр ҙә һин күңелеңдә бала булып ҡалмаһаң, күңелең менән йә ҡуянға, йә бесәйгә оҡшамаһаң, сәхнәгә сығып, халыҡты аптыратып булмай, сөнки беҙҙең ижадтың күп өлөшө эскерһеҙлеккә бәйле. Бына ошо эскерһеҙлекте күргән кеше генә театрға йөрөй ҙә инде.

▸ **Сәхнәлә үҙегеҙҙе ниндәй амплуалағы актер тип һанайһығыҙ? Ғөмүмән, асылығыҙ ниндәй: комик актермы, әллә драматик, етди ролдәр башҡарған актермы?**

- Мин үҙемде оҙаҡ йылдар комик актер тип уйлап йөрөнөм. Әммә Айрат Абушахманов Шукшин хикәйәләрен берләштергән спектакль ҡуйҙы һәм мин шунда "Ышанам" тигән хикәйәләге попты уйнаным. Шул ваҡытта драматик, хатта трагик типаждарҙы ла башҡара алырымды тойҙом, йәғни киң пландағы актер. Әммә комедия жанры миңә барыбер яҡын.

▸ **Ниндәй генә ролдәр башҡарһағыҙ ҙа, һеҙ сәхнәгә килеп сығыу менән тамашасы үҙе лә һиҙмәҫтән йылмайып, көлөп ебәрә һәм комик актер амплуаһы хатта етди ролдәрҙә лә сағылыш таба...**

- Таба, әлбиттә, сөнки ул бит кешенең асылына бәйле. Хатта драматик ролде башҡарғанда ла уның көлкөлө яғын табырға була. Тормошта ла бит һәр ваҡыт ҡайғырып, уйланып ҡына йөрөмәйһең. Һәр хәл-ваҡиғала ла үҙеңә күңел рәхәтлеге табаһың, кешене шаяртып ебәреп, ул көлһә, үҙең шатланып китәһең. Шулай булғас, трагедия, драма типаждарын уйнағанда ла ниндәйҙер көлкөлө һыҙаттар асырға була. Барыбер комедия аша драматик трагизмдар көсләрәк асыла. Сәхнәгә кеше көлдөрөр өсөн генә сыҡһаң, маҡсатыңа өлгәшә алмайһың, ә үҙең шуны ысын итеп ҡабул итергә тейешһең. Үҙең ҡабул иткәндән һуң ғына халыҡ һиңә ышана.

Ҡайны берҙә, уның нимәһе бар, сыҡтың, кеше көлдөрҙөң дә эшең дә бөттө, тип уйлаусылар ҙа бар. Ысынбарлыҡта комедия - ул нык ҡатмарлы жанр, тимәк, комик роле лә шулай.

Яңыраҡ Актерҙар йорто эргәһенән үтеп китеп барам, күрәһең, ниндәйҙер иртәлек булғандыр. Әсәләреме, өләсәләре менәнме ике малай туҡталышта тора. Ҡулдарында Ҡыш бабай бүләге, уны асып, кәнфиттәрҙе һайлайҙар: быныһы ҡарбуз, тегенеһе икенсе. Үтеп китеп барышлай, "Бына быныһы хәтәр шәп кәнфит, кешегә күрһәтмә, тиҙ генә ашай һал", тигәйнем, рәхәтләнеп һаһылдап көлөп ҡалдылар. Бына ошолай бер сәбәпһеҙгә тик торғанда кешенең күңелен күтәреү - ул комик образы.

▸ **Кешенең күңелен уйлайһығыҙ, ә бына үҙегеҙ ҡасан һуңғы тапҡыр рәхәтләнеп, күҙҙәрегеҙҙән йәш сыҡҡансы көлдөгөҙ?**

- Мин күҙемдән йәш сыҡҡансы көлһәм, ҡатыным: "Беренсе ҡаттан алып 10-сы ҡатҡа тиклем барыһы ла ишетә",- ти. Уға ла ҡарамай көләм. Яңыраҡ ҡына ҡыҙым Аҡйондоҙ көлдөрҙө. Ул үҙе төрлө видеороликтар төшөрә. Бер видеоһында асарбаҡ булып төшкән. Йәнәһе лә, уны "доньяның иң бай ҡатын-ҡыҙы", тип, яңылыҡтарҙа күрһәтәләр. "Төүге миллиондарыңыҙҙы нисек эшләнегеҙ?" - тип һорайҙар һәм ул етди төҫ менән йырлап тора: "Я стою у Курского вокзала
С протянутой рукой.
Подайте Христа ради
Червонец золотой".

Унын уйнауынан һыным ҡатып, йығылып ятып, ысынлап та күҙҙәремдән йәш сыҡҡансы көлдөм.

▸ **Ҡабат ҡуяндарға урап ҡайтайыҡ әле: үҙегеҙҙе кем тип уйлайһығыҙ - йорт ҡуянымы, әллә унда-бында сабып, сәйәхәттә йөрөргә яратҡан ҡыр ҡуянымы? Хәйер, һеҙ былай ҙа гастролдәрҙә күп йөрөйһөгөҙ инде ул...**

- Мин үҙемде йорт ҡуяны тип һанайым. Бына ял көндәре етһә, репетиция булмаған ваҡыттар булһа, өйҙән ҡыуалап та сығара алмайҙар. Көн буйына өйҙә ултыра алам.

▸ **Оҙаҡ йылдар Ҡыш бабай булып хеҙмәт итәһегеҙ, балаларҙы ҡыуандыраһығыҙ, ә үҙегеҙ уға ышандығыҙмы һәм ышанаһығыҙмы?**

- Беҙ бәләкәй саҡта Ҡыш бабайҙы мәктәп шыршы байрамында ғына күрә торғайныҡ. Шуға, ышанғанмындыр тип уйлайым, сөнки әгәр ҙә 25 йыл дәүерендә үҙем Ҡыш бабай булып йөрөп, балаларға шатлыҡ шат һәм көләс булып ҡала. Тәртип яратҡан йәнлек. Ул үҙенең нимә эшләгәнен белә, уның бөтә нәмәһе үҙ урынында булырға тейеш, йәғни театрҙа минең өҫтәлем тулы булһа ла, ҡайҙа нимә ятҡанын үҙем беләм - шул яҡтан ҡуянлығым бар. Ваҡыттың ҡәҙерен белә, йәғни бик етди сәбәптәр булмаһа, һуңларға яратмай, ваҡытында килеп, үҙ һүҙен әйтеп, ваҡытында китә белә. Мин дә кешене көттөрөргә яратмайым, ҡайҙа саҡырһалар ҙа алдан барып, үҙем көтөп ултырам.

▸ **Ҡуян тураһында иң яратҡан көләмәсегеҙ ниндәй?**

- Минә оҡшаһа ла кемдәргәлер оҡшамаҫҡа ла мөмкин, сөнки бер аҙ тоҙло-борослораҡ, әммә ул бит көләмәс, кинәйә лә бар, шуға һөйләйем әле: урмандан бер ҡуян сабып китеп бара, ти. Ағас башында ултырған ҡарғаны күреп ҡалған да был: "Эй, нимә эшләп ултыраһың унда?" - тип һораған. Ҡарға: "Юҡты бушҡа ауҙарып ултырам инде шунда", - тип яуаплаған. "Улай булғас, мин дә ултырайым әле", - тип



# "ҠУЯНМЫН ДА, БЕСӘЙМЕН ДӘ КЕҮЕК", -

## ти Ҡыш бабайыбыҙ Хәким Мортазин

бүләк иткәнмен икән, тимәк, үҙем дә ышанам. Үҙең ышанмаһаң, балаларҙы ышандырып булмай, улар ялғанды тиҙ тоя. Шуға, нимә эшләһәң дә төүҙә үҙеңә ышанырға кәрәк. Бер йылды Президент шыршыһында Ҡыш бабай булдым. Ул ваҡытта был сара Дәүләт циркында үтә ине. Әллә социаль шыршы булды ул - аныҡ ҡына хәтерләмәйем. Арена менән рәт араһынан китеп барам, балалар менән һаулыҡ һорашам, кемдәрҙеңдер ҡулынан тотам, ҡайһыһының башынан һыйпап китәм. Бер ваҡыт ҡолағымдың осо менән генә: "Ҡыш Бабай минең менән һаулыҡ һорашманы..." - тигәнде ишетәм. Яңы ғына теле ныҡлап асылып һөйләшә башлаған 3-4 йәштәр тирәһендәге бала. Әйләндем дә: "Балаҡайым, ғәфү ит инде, мин бит ҡарт кеше, күрмәгәнмен һине. Яңы йыл менән ҡотлайым! Һау-сәләмәт бул, йәме", - тип башынан һыйпағайным, ауыр итеп, "Эээ-эхххх", тип көрһендө лә, "Ярай", - тигән булды. Шул баланың шар асылған һәм ана түгеләм, бына түгеләм тип ке-

✓ ***Беҙҙең халыҡтың матур бер йолаһы бар: кемдәр ауылда тыуып-үҫкән, улар был ялдарҙа мотлаҡ ауылға ҡайта. Кеше ҡала мөхитенән ял итеп, психологик торошон ыңғайға көйләй алған мөхиткә әләгергә тырыша, быныһы бик дөрөҫ.***

нә торған йәш менән мөлдөрәмә тулы күҙҙәре һаман да күҙ алдында. Үҙем дә юғалып ҡалдым. Уны бер ниндәй фотоаппарат менән төшөрөп алып та, әйтеп анлатып та булмай. Баланың шул тиклем Ҡыш бабайға ышаныуы, уны күреүен һәм лазер кеүек үтә-нән-үтә тишеп ҡарағанын ғүмерҙә лә онотмаясаҡмын.

Былтыр "Цветы Башкирии" биҫтәһенә барҙым. 5-6 бала, береһе 6-7 йәштәр тирәһендә. Мин килеп инеү менән: "Кәҙерле Ҡыш бабай, килгәнең өсөн рәхмәт! Мин һине йыл буйына көттөм. Һин минең саҡырыуымды ишеткәнһең!" - тип, йүгереп килеп ҡосаҡлап алғайны, күҙҙәремә йәш тулды. Ҡарһылыу булып ҡыҙым Аҡйондоҙ йөрөй ине, минә ҡараны ла, ул да шаҡ ҡатты ла ҡуйҙы. Тамаҡҡа төйөр килеп тығылды, илап та, көлөп тә, нимәләр тип әйтеп тә булмай. Иплән кенә ата-әсәһенә "Минә һыу биреғеҙ әле", - тием. Шунан саҡ ролгә инеп киттем. 25 йыл эшләү һәм Ҡыш бабай булып балаларға хеҙмәт итеүем дәүерендә донъяла сабыйҙарҙы шатландырыуҙан да изгерәк ғәмәл һәм баһа юҡ, тип шикләнмәй әйтәм.

**▸ Ә Ҡыш бабай Хәким Мортазин үҙе мөғжизәгә ышанамы?**

- 2008 йылда миндә яман шеш булыуын асыҡланылар, сир сигенгәс, Яңы йылда Ҡыш Бабай булып йөрөйөм. Хәҙер хатта ул баланың ҡыҙмы-малаймы икәнлеген дә иҫләмәйем, йөҙөн дә күҙ алдына килтерә алмайым - 5-6 йәшлек бала минә үҙе эшләгән открытка бүләк итте. Рәхмәт әйтеп алдым да, ҡуйынға ҡыҫтырып, байрамды дауам иттем. Һуңынан бүлмәмә ингәс, открытканы асып ҡараһам, унда: "Будьте здоровы!" - тип яҙылған. Әллә ул минең һаҡсы фәрештәм булдымы икән тип, һаман да аптырайым. Ысын мәғәнәһендә бер мөғжизә булды ул. Ул открытка минең гримм бүлмәһендә әле лә тора.

**▸ Яңы йыл - ул мөғжизәләр, мажаралар мәле. Ҡыш бабайҙың үҙе лә мөғжизәгә ышана икәнен асыҡланыҡ, ә бына мажараларға тарыймы?**

- Балалар бәләкәй ваҡытта Ҡыш бабай булып йөрөп, улар йоҡлағас ҡайтып инәм дә, кейемдәрҙе киптерергә торбаларға эләм, иртән улар уянғансы йыйып алып ҡуя инем. Бер нишләптер кейемдәрҙе алырға онотҡанмынмы, өлгөрмәнемме, ҡыҙым күреп ҡалды бит. "Атай, Ҡыш бабай юҡмы ул әллә?" - тип һорай. "Нишләп?" - тием. "Һуң, уның кейеме торбала тора ла инде, - ти. - Ҡыш бабай һинме әллә?" "Эйе, мин, - тием, - ысын Ҡыш бабай бик ҡарт, балаларҙың барыһына ла барып бүләк тапшырып өлгөрмәй, шуға мине бында үҙенең ярҙамсыһы итеп ҡуйҙы. Ул бүләктәр ебәрә, мин бында таратып сығам". "Әәәә, ысын Ҡыш бабай бар инде улайһа..." - тип китеп барҙы.

Ә бер йыл шулай ҡаланан ситтә, Шамонино, Бурцево яҡтарына саҡырҙылар ҙа, йөрөйөм балаларҙы ҡотлап. Бурцевола эшемде бөтөп, туҡталышҡа сыҡтым. Әҙерәк буранлап тора ине, мин сығыуға китте бит буран ҡотороп. Үҙемде-үҙем әрләйем, үҙемдән көлөп алам, эт сыҡҡыһыҙ көндә әйҙә генә ултырһаң булмаймы, тип. Шунан үҙемдең Ҡыш бабай икәнлегемде иҫләп, шым ғына торам. Бер генә машина ла, автобус та юҡ. Ҡапыл, тораһың инде мөғжизәсе бабай булып, тип үҙемде әрләп алдым да, белгән доғамды уҡып, хәҙер 15 минуттан автобус килмәһә, боландарымды саҡырам, тип таяғым менән ергә ҡаты ғына итеп туҡылдатып ҡуйҙым. Өс минут та үтмәне, автобус алдыма шып итеп килеп тә туҡтаны.

Бына шулай, буранда ла, хатта 40 градус температура менән ятҡанда ла балаларҙы ҡотламай ҡалғаным юҡ һәм бер ваҡытта ла "Нишләп шул ваҡытта шулайтып йөрөнөм икән", тип үкенгәнем булманы. Балаларҙың күңеле саф, таҙа һәм уларҙы алдап булмай, улар Ҡыш бабайҙы көтә һәм мин уларға ошо шатлыҡты бүләк итәм икән, тимәк, был донъялағы бәләкәй генә миссиямды үтәйем.

**▸ Хәҙер инде ҡыҙығыҙ үҙе Ҡарһылыу, ысынлап та олатай менән ейәнсәр кеүек килеп сыға, был осраҡта иһә атай менән ҡыҙ. Икенсе Ҡарһылыу менән эшләү еңелме, әллә ҡыҙығыҙ менәнме?**

- Ҡыҙым менән бергә эшләү еңел ул, сөнки бер-беребеҙҙе күҙ ҡарашынан аңлап торабыҙ, әммә, икенсе яҡтан, ауыр ҙа, сөнки ул шул тиклем эшен урын-еренә еткереп үтәп өйрәнгән, бер фатирҙан балаларҙы ҡотлап сығыу менән: "Атай, бына ошо урында шул һүҙеңде әйтмәнең, был урында шулай эшләргә оноттоң", - тип дөғүәләрен белдерә. Һуң, мин бит ҡарт та инде, олатай, онотоп та ебәрәмдер, күрәһең...

**▸ Хәҙер барыһы ла шәхси транспортҡа күсеп бөттө, әммә элегерәк күпселек йәмәғәт транспортында йөрөнө. "Ҡуян" булып йөрөргә тура килдеме?**

- Ооо, һанаһаң осона сығып булмаҫ. Ул ваҡытта ҡуянлыҡтың исемен есеменә тап килтереп ҡуйҙыҡ инде ул, йәшерен-батырыны юҡ. Хатта өйләнеп, Сәғит Ағиш урамында йәшәгәндә лә булғыланы. Бер шулай эшкә тип сығып киттем дә, туҡталышҡа еткәс, янсығымды алмағанымы иҫемә төштө. Кире боролоп торманым, автобус килгәйне, ултырҙым да киттем. Юл буйына нимә тип кенә әйтеп аҡланайым икән, тип уйланам. Актерҙар йорто туҡталышында пассажирҙар өймәкләшеп төшөргә тора ине, шулар менән ҡуша төшөп ҡалдым. Үҙем китеп барам, үҙем "Шофер арттан ғына килеп сыҡмаһа ярар ине", тип уйлайым. Шундай ваҡыттар булды инде ул, ҡалайтаһың. Тормош бит.

**▸ Хатта кондукторҙар: "Ярай инде, Хәким, түләп торма, бар төш", - тиһә лә аптырарға түгел...**

- Ундай кондукторҙар осраманы, әммә ҡайһы берҙә руль артында башҡорт егеттәре булһа, үҙҙәре аҡса алмай торғайны. Туҡталышта торһам: "Әйҙә, башҡортом, ултыр, алып ҡайтам," - тиҙәр ине. Аҡса бирәм, тиһәң дә, "Кит, бынауындай башҡорттан, таныған башҡорттан аҡса алып ултырмайым инде, бар, төш", - тип баш тарта инеләр.

Һүҙҙә ҡуян менән бесәйҙән башлағас, өҫтәп китәйем әле: ҡуян ул күренмәйенсә, һиҙҙермәйенсә генә йөрөргә тырыша, ә бесәй һәр ваҡыт кеше алдында, кешенең яратҡан йорт хайуаны, үҙен күрһәтә лә, яраттыра ла белә. Шуның кеүек, мин дә артыҡ күренеп бармаһам да, шөкөр, халыҡ танып тора, хатта башҡа милләт вәкилдәре лә юлда туҡтатып һөйләшеп, рәхмәт әйтеп китә. Театрҙа ла шулай - кәрәкмәһә, минең ҡасан килеп, ҡасан киткәнде лә белмәйҙәр, кәрәк булһа, беренсе ҡатта ишектән инеү менән белеп торалар.

**▸ Тимәк, ысынлап та, тыуған йылығыҙ асылығыҙға тап килә...**

- Шулайҙыр, хатта ҡатыным да, һинең атлап йөрөгәнең һиҙелмәй, ти. Бесәйҙең дә бит атлап йөрөгәне ишетелмәй. Бер заман Сәғиҙулла Байегет бригадаһы менән Белорет районының Ғәбдүк ауылына барҙыҡ. Ямғыр яуған ваҡыт, бысраҡ. Башҡаларға итек килтерҙеләр, минең размерҙы таба алмағандар. Мин туфли менән. Атлағыҙ, тинем дә, яйлап ҡына ҡәртә аръяғынан киттем. Туҡталып йортҡа барып еттек, тегеләр итек менән батҡаҡҡа батып бөткән, ә минең туфли бысранмаған да тиерлек. Сәғиҙулла: "Хәким, һин нисек атлап йөрөйһөң ул?" - тип аптырай. "Мин - бесәй, ҡайҙан йөрөргә икәнлеген беләм", - тип көләм.

**▸ Яңы йылға "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына Ҡыш бабай ниндәй теләктәрен еткерер икән? Мөғжизәсе бабайҙың теләктәре тормошҡа ашыуына барыбыҙ ҙа ышана бит.**

- Беҙҙең театр коллективы өйрәнеп бөткән инде, үҙем яман сирҙе еңгәндән һуң һәр ваҡыт бер генә теләк: һаулыҡ теләйем. Һаулыҡ булһа был донъяла, эшең дә була, эшең булһа, аҫҡаң да була, аҫсаң булһа, ашың да була, ғаиләңде лә ҡарайһың, ҡайҙалыр ял итергә лә барыу форсаты табыла, барлыҡ ауырлыҡтарҙы еңеп сыға алаһың. Шуға мин гәзит уҡыусыларға, үҙемдең яратҡан, мине хөрмәт иткән тамашасыларыма, ғәмүмән, һәр кемебеҙгә донъяның тыныслығын һәм һаулыҡ теләйем. 2023 йылды матур итеп ҡаршы алып, күҙ йомоп аҫҡансы оҙатып, 2024 йылға һикереп барып инергә яҙһын!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

## ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# ЯЛДАРЫҒЫҘ ЯЛ БУЛҺЫН!



**Күптәр Яңы йыл байрамын унан һуң башланасаҡ оҙайлы каникулдары өсөн дә ярата һәм көтөп ала. Үҙенә күрә был ял отпуск кеүек ҡабул ителә һәм ул, һис шикһеҙ, һиңә сикһеҙ бәхет тойғолары ғына бүләк итәсәк һымаҡ. Таяҡ ике осло булған кеүек, оҙайлы ялдарҙың да үҙенең нескәлектәре бар. Аҙна ахырына ял итеүҙән ҡәнәғәтлек тойғолары кисереү урынына - арыу, йәки ғаилә ағзалары менән һүҙгә килешеүҙән стресс кисереүегеҙ ҙә бар, тип иҫкәртә белгестәр. Ошолар хаҡында клиник психолог, психоаналитик Әлфиә Сәғит ҡыҙы БАЙРАМҒОЛОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

Оҙайлы ялдарҙа беҙ үҙебеҙҙең өйрәнгән гәҙәти ритмдан ситкә тайпылабыҙ. Оҙағыраҡ йоҡлайбыҙ, бөтөнләй икенсе ваҡытта ашайбыҙ. Байрамға әҙерләнгәндә өйөн таҙалап-йыйыштырып, ризыҡты ла артығынан тыш әҙерләгән булһа, хужабикәләр хатта берәй көн ашарға бешереп тә тормай әле, гәҙәттә. Эшкә барырға кәрәкмәй, нимә теләйем - шуны эшләйем, тип уйлағандар ҙа аптырап ҡалыуы ихтимал. Әлек, мәҫәлән, театрға барыр инем, эштән бушап булмай, тиһәгеҙ, хәҙер ваҡыт булыу менән унда бик үк барғығыҙ ҙа килмәүе асыҡлана. Быға тиклем конькиҙа шыуырға яратмаған булһағыҙ, каникулдарҙа һеҙ катокка ла бармаясаҡһығыҙ. Саңғы шыуырға яратмаһағыҙ, дуҫтарығыҙ менән махсус ял итеү базаларына ла китмәйәсәкһегеҙ. Йәғни, ниндәйҙер шөғөләгеҙ юҡ икән, был ялдарҙа уларҙың барлыҡҡа килеүе икеле. Шулай ҙа алдан план ҡороп, үҙегеҙҙе еңеп, ниндәйҙер яңы шөғөл үҙләштерһәгеҙ, һеҙ герой, үҙегеҙ менән лайыҡлы ғорурлана алаһығыҙ.

Йыл буйы эшләп арыным, ял итеп тик ятам, тип уйлау хата фекер. 2-3 көн тик ятҡандан һуң, тороп, нимәләр эшләүе ауыр буласаҡ, сөнки энергия хәрәкәт иткәндән генә тулылана. Шуға ла ниндәйҙер ижади планығыҙ юҡ икән, ялдарҙа сәләмәтлекте нығытыуға бағышлағыҙ. Диванда тик ятыу урынына тышта йөрөгөҙ, ике осраҡта ла бер нәмә лә эшләмәйһегеҙ, әммә икенсеһендә саф һауаның файҙаһы ҙур. Тәүлегенә 9 сәғәттән артыҡ йоҡлау мейе эшмәкәрлеге өсөн зарарлы, тик ятыуҙан арҡа бағанаһы тонусын юғалта, организм аҡыллы, кәрәкмәгәс, энергия бүлеп сығарыуҙы ла кәметә. Бына ошолар барыһы ла аҙаҡтан, эшкә сығырға ваҡыт еткәс, һеҙгә ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырасаҡ. Шуға ла ял - ул бер нәмә лә эшләмәү түгел, ә эшмәкәрлекте икенсе нәмәгә йүнәлтеү. Һәм ул эшмәкәрлекте һеҙ үҙегеҙ һайлайһығыҙ.

Бында тағы ла шуныһы бар - һәр кем үҙенең әлеге мәлдәге хәл-торошонан сығып, был ялдарҙы нисек үткәреү тураһында планлаштырырға тейеш. Мәҫәлән, кемдеңдер эше бик тынғыһыҙ, йыш ҡына йоҡоһо туймай икән, 1-2 көн булһа ла тыныс мөхиттә ҡалып, ял итеү өсөн шарттар булдырырға тырышһын. Кемдер тотош ғаилә өйҙә йыйылған ваҡытта үҙен ҡыйынораҡ тоя икән, ярты көнгә булһа ла үҙ-үҙе менән ҡалырға мөмкинлек табырға тейеш. Һәр кем үҙенең мохтажлығынан сығып, үҙе өсөн комфортлы мөхит булдыра алмаһа, был ялдар уға яҡшы кәйеф өҫтәмәйәсәк. Беҙҙең халыҡтың матур бер йолаһы бар: кемдәр ауылда тыуып-үҫкән, улар был ялдарҙа мотлаҡ ауылға ҡайта. Кеше ҡала мөхитенән ял итеп, психологик торошон ыңғайға көйләй алған мөхиткә әләгергә тырыша, быныһы бик дөрөҫ. Был мөхит үҙенең тыуған йортоң икән, атай-әсәйең, туғандарың менән күрешеп, туйғансы һөйләшеп, бер-береһе менән һирәк кенә аралашҡан балаларығыҙҙы осраштырыу һәйбәт күренеш. Тик ыңғай яҡтың киреһе лә бар, халыҡ араһында, ҡайтһалар - бер ҡыуанам, китһәләр - ике ҡыуанам, тигән лаҡап юҡтан барлыҡҡа килмәгән. Кеше бер-береһенән туйып та китеүе ихтимал, ошоларҙы алдан күҙаллап ҡуйыу кәрәк.

Әлбиттә, беҙ был ялдарҙа балалар менән тығыҙыраҡ, күберәк, яҡыныраҡ аралашабыҙ. Баланың энергияһы ташып тора, оҙайлы ялда түгел, ике көнлөк ялдарҙа ла күпселек атай менән әсәйҙәрҙең баштары әйләнеп китә. Шуға ла өлкәндәргә ҡарағанда балаларға каникулдарҙы планлаштырыу мөһимерәк. Үҙенең бала сағына әйләнеп ҡайтҡандай булып, балалары менән санала, саңғыла шыуып, әүҙем ял ойоштора алған атай-әсәйҙәр бәхетле. Ялдар бынан ғына килмәй бит, хәҙер нисә йыл беҙ ошолай оҙайлы ял итәбеҙ. Шуға ла уларҙы алдан планлаштырып, күңелле итеп үткәрергә өйрәнегеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ял итә белеү ҙә һөнәр, көтөп алынған каникулдарҙың нисек үтеүе үҙегеҙҙең ҡулда, хөрмәтле уҡыусылар. Артыҡ ныҡ әүҙемлек тә зыян, ялдарҙан һуң ял итеү өсөн тағы ла ял кәрәк булып ҡуйыуы ла бар. Шуға ла бөгөнгө ҡунағыбыҙҙан һеҙгә тағы бер кәңәш - ике сик араһында бәргеләнмәй, алтын урталыҡ һаҡлауҙан да яҡшырағы юҡ. Тормошҡа ышаныс арттырыу өҫтөндә эшләргә, позитив булырға һәм балаларҙы ла шуға өйрәтергә кәрәк. Ялдарығыҙ ял булһын!**

**Ләйсән ВӘЛИЕВА әңгәмәләште.**

***✓ Шунда ғына Мир сәскәне гид ҡатын һатып алғанын һәм Иолантаға бүләк итеп бирергә ҡушыуын аңлап, еңел һуланы. Ысынлап та бүләк алыу тураһында уйына ла килмәне лә баһа!***




Өс аҙнаға яҡын сәйәхәттә йөрөгәндә Мир башҡаса Иоланта тураһында уйламаны. Әйтерһең, ундай кеше бөтөнләй булмаған. Һәр барған ерҙәрен ентекләп ҡараны, хәтерендә һаҡларға тырышты. Ҡайтҡас, ҡатынына, ҡыҙҙарына, колхоздағы иптәштәренә тәмләп, тәфсирләп һөйләр өсөн иҫендә ҡалдырырға тырышты. Ҡайҙа ғына булмаһын, тик бында ғына осраған сувенирҙар һатып алды, кемгәлер бүләк итер, ҡайһыларын ҡәҙерле иҫтәлек итеп, шкаф эсенә ҡуйыр. Ике көнгә Магдебург ҡалаһында туҡтаясаҡтарын белгәс, йөрәге йәнә талпынып китте. Таныш ерҙәр... Йәшлегенең бер осоро тороп ҡалған урындар... Автобуста ул гид ҡатын янына ултырҙы. Байтаҡ тыштағы тәбиғәт күренештәренә ҡарап килә биргәс, ябай ғына әйбер һорағандай әйтеп ҡуйҙы:

- Фрау Ланге, ә һеҙҙә исем-фамилия буйынса кешене эҙләп табыу мөмкинме?

- Бик тә мөмкин, - тине гид Мирға тәү күргәндәй ҡарап. - Кемде эҙләйһегеҙ? Туғаныгыҙҙымы?

- Ю-у-уҡ, - тип һуҙҙы ир уға ҡарамай, тышҡа баҡҡан көйө. - Элек мин бында хеҙмәт иттем. Шул саҡта белгән танышымдың был донъяла бармы... юҡмы икәнлеген асыҡлағым килә. Ул ошо беҙ туҡтаясаҡ Магдебург ҡалаһында уҡый ине.

Тулҡынланыуҙан тауышының ҡалтыранғанын белдермәҫ өсөн яйлап, иҫе китмәгәндәй генә әйтергә тырышты Мир.

- Бына минең блокнотыма яҙығыҙ, мин үҙ сығанаҡтарым аша белешермен, - тине Ланге.

Ручкаға тотонған ерҙән ир кире уйланы. Ул бит әле элекке хәрби разведчик. "Бер нәмәне лә ҡағыҙға төшөрмәҫкә, ул һинең өсөн үлемесле дәлил булыуы мөмкин. Бөтөн мәғлүмәтте мейелә һаҡларға".

- Юҡ, - тине Зиннәтуллин кире ҡаҡмаҫлыҡ итеп. - Белеп тораһығыҙ, беҙ дәүләт именлеге хеҙмәткәрҙәре күҙәтеүе аҫтында. Был үтенесем дә бер кемгә лә билдәле булмаһын ине.

- Әлбиттә, һис шикһеҙ! Минән һүҙ сыҡмаҫ! Моғайын, хәрби сер түгелдер? - Ҡатын йылмайҙы.

- Юҡ, шәхси танышым, дуҫым. Хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ: Иоланта Коссман, 1942 йылғы, Шервинда тыуған. Кейәүгә сыҡһа, фамилияһы үҙгәргәндер ҙә. Атаһы Юрген Коссман.

- Берәй нәмә асыҡлай алһам, әйтермен. Әлегә бер кемгә лә ләм-мим, - тине гид. Ул көндө кисләтеп кенә Магдебургҡа килеп еттеләр. Күмәк кеше отелгә урынлашып, киске тамаҡ ялғауға төн дә етте. Оҙон юлдан, алған тәьҫораттарҙан арып-алйыған сәйәхәтселәр шундуҡ татлы йоҡоға сумды. Бер Мир ғына йондоҙло күккә төбәлеп, оло тәҙрә янында оҙаҡ уйланып ултырҙы. Йәшлегенә, һалдат саҡтарына йәнә ҡайтып ураны...

Икенсе көнөнә төш ваҡытында Ланге менән бер өҫтәл артына тура килделәр. Бәлки, экскурсовод ҡатын үҙе шулай һайлағандыр. Һүҙһеҙ генә тамаҡ ялғап бөтөп, ауыҙ-морондарына күкһел салфетканы иплә генә тейҙереп алғас, Ланге:

- Таптым танышығыҙҙы. Ошонда, Магдебургта йәшәй. Телефоны миндә, - тине шыпырт ҡына.

Мирҙың йөнө алҡымына килеп тығылғандай булды. Ярай әле ашап ултырғанда хәбәр итмәгән, сәсәп китер, йә ашы тамағына торор ине. Әле лә һауа етмәй, саҡ-саҡ тын алды. Йөҙө бурҙаттай ҡыҙарҙы.

- Әйтегеҙ телефон номерын, мин иҫтә ҡалдырырмын.

- Юҡ, - тине ҡатын сабыр ғына. - Һеҙ, беренсенән, ныҡ тулҡынланаһығыҙ. Тынысланығыҙ. Үҙегеҙгә иғтибарҙы арттырмағыҙ. Икенсенән, бүлмәләге телефондан шылтыратыу түләүле һәм баяғы әйткән органдар тыңлауы ихтимал. Өсөнсөнән, үҙем һөйләшермен. Һеҙҙең бында икәнлекте әйтермен. Осрашырға теләге булһа, килер. Тик ҡалаға сығыу, йә паркта осрашыу - ярамай. КГБ һәр саҡ уяу. - Ланге байтаҡ уйланып ултырҙы, ҡайҙа осрашыуға иғтибарҙы йәлеп итмәҫен иҫәпләп ҡараны, ахыры.

- Бәлки, кинотеатрға барырғалыр? - тип тәҡдим итте Мир шыпырт ҡына. - Кино барған ваҡытта залда ҡараңғы, кеше лә шәйләмәҫ.

- Уныһы шулай. Тик... унда нисек һөйләшмәксеһегеҙ? Бер өн сығарһығыҙ, бөтөн кешенең иғтибарын яуларһығыҙ. Беҙҙә фильм барғанда һөйләшеү тыйылған. Ул ҙур әҙәпһеҙлек һанала. Беҙ былай итәйек... Әгәр танышығыҙ осрашыуға килергә теләһә, киске аштан һуң бер ҡайҙа ла сығып йөрөмәгеҙ. Ул үҙе һеҙҙең бүлмәгә килер. Бер кем дә күрмәүен үҙем тәьмин итермен.

Киске аштан һуң үткән ике сәғәткә яҡын ваҡыт Мир Зиннәтуллин өсөн ике йылға торошло булды. Минут һайын ҡарағангамы, стеналағы оло сәғәт уҡтары бер урында ҡатып ҡалғандай тойолдо. Ул хатта сәғәттең эшләү-эшләмәүен тикшереү өсөн стена эргәһенә барып, ҡолағын ҡуйып тыңлап та ҡараны. Текелдәп тора ла ул, тик уҡтары ғына ниңәлер ҡатып ҡалғандай. Бер аҙҙан ишек шаҡынылар. Тауышы юғалып, инергә саҡырырға өлгөрмәй ҡалды, йәш егет килеп инде:

- Герр Мир?- тип һораны ул аптырап ҡатҡан иргә ҡарап.

- Эйе, - тип баш һелкетте Мир. - Был һеҙгә, ҡул ҡуйығыҙ, - тип егет блокнот һуҙҙы. Нимәгә икәнен аңламаһа ла, Мир ҡалтыранған ҡулдары менән имзаһын ҡуйҙы. Егет рәхмәт әйтеп, матур сәскәләр гөлләмәһен ҡулына тотторғас, аҫҡан ауыҙын яба алмай, ҡатып ҡалды. Улай әйләндереп, былай ҡыландырып торғас, сәскәләр араһына ҡыҫтырылған ҡатырға ҡағыҙҙы күрҙе.

"Уға бүләк итегеҙ. Бәхәсләшәм, һеҙҙең сәскә алырға башығыҙ етмәгән. Шулай бит? Ланге Бриджит"- тип яҙылғайны. Шунда ғына Мир сәскәне гид ҡатын һатып алғанын һәм Иолантаға бүләк итеп бирергә ҡушыуын аңлап, еңел һуланы. Ысынлап та бүләк алыу тураһында уйына ла килмәне лә баһа! Хәйер, башҡорт ирҙәрендә, башҡорт ауылында 80-се йылдарҙа кем осрашҡан ҡатынға гөлләмә бүләк итеп торһон!

Исәр, тиерҙәр ине ауылдаштары. Мир йылмайҙы һәм ҡапыл тынысланды. Был бит бары элекке танышы менән осрашыу ғына. Бер нәмә лә талап ителмәй. Һөйләшеү, тормош юлын белешеү. Үҙең хаҡында һөйләү генә. Свидание ла, һөйәркәңде ҡаршылау ҙа түгел! Тыныслыҡ килгәс, еңел булып китте. Ул муйын тирәһендәге күлдәк төймәләрен ысҡындырҙы, галстугын сисеп ырғытты, пинжәген дә һалып, ултырғыс артына элде. Нимә ул кейәү егете һымаҡ костюм-салбарҙа, галстукта тора әле? Рәсми делегацияны ҡаршылаған Брежнев шикелле. Тынысланып, карауатына ултырғайны ғына, йәнә ишек шаҡынылар. Ипле генә ҡағылыуҙан "Ул!" тигән уй килде. Тик ярһыманы ла, аптыраманы ла.

- Инегеҙ! - тине немец теләндә. - Ишек асыҡ.

Бына ул... Иоланта... Шул уҡ ҡаҡса ғына кәүҙә, яурынға һибелгән аҡһыл сәс. Шәмәхә-күк күҙҙәр. Күҙ ситенә саҡ ҡына тартылған һырҙар... Ослo танау. Шул уҡ. Бары әҙ генә олоғайыу сырайы сыҡҡан.

- Һаумы! - тип ҡулын һуҙҙы Мир. - Үт, рәхим ит!

Ҡатын ҡулын ирҙең усына һалды һәм уны шундуҡ тартып ала һалып, Мирҙы ҡосағына алды.

- Был һин! Ысынлап та һин! Минең яратҡан башҡортом!

Быңдай уҡ осрашыуҙы, ҡосаҡлашыу, шатлыҡты көтмәгән Мир баҙаны. Үҙе ҡатынды ҡосаҡламаны, кәүҙәһе буйлап һалынған ҡулдар шул килеш ҡалды. Йылылыҡ та, тартылыу ҙа тойманы, шикелле. Бары ҡыҙыҡһыныу ғына.

- Мин һине көттөм! Оҙон-оҙаҡ йылдар көттөм! - тип ашығып һөйләне ҡатын.- Ышандым бер күрешермә һәм, ниһайәт, ул көн килде. Һин тере! Һин бында! Рәхмәт Хоҙайыма!

Мир йылмайҙы.

- Бала саға кеүек, - тине ул Иолантаны ултырғысҡа этә биреп. - Ултыр, тыныслан. Әйҙә, яйлап һөйләшәйек. Кем һин? Ҡайҙа һин? Ғаиләң бармы?

Иоланта йәшләнгән күҙҙәрен һөрттө. Ултырҙы ла Мирҙың күҙҙәренә туп-тура ҡараны.

-Һин бөтөнләй үҙгәрмәгәнһең. Шулай уҡ сибәр! Һиңә йылдар ҡағылмай үткән, ахырыһы!

- Улай тимә. Йылдар һәр кемдең маңлайына бураҙналар һалған, - тине ир. - Һин дә шул уҡ... Ғаиләң бармы? Ирең? Балаларың? Минекеләр өсәү. Дүртенсегә көтәбеҙ.

Был һүҙҙәр ҡатынды айнытып ебәрҙе буғай. Тынысланды, матур ап-аҡ ҡулъяулығын бөтәрләүҙән туҡтап, кире кескәй сумкаһына һалды. Танауын тартып, аяҡтарын ултырғыс аҫтына ҡуйып, йәтешләп ултырҙы.

- Ниңә улай күп? Минеке берәү генә. Беҙҙә күп бала тәрбиәләү маҡталмай. Берәү, күп тигәндә икәү.

- Ирең кем? Үҙең ҡайҙа эшләйһең?

- Һин ҡайтып киткәс тә кейәүгә сыҡтым. Яңы ғаилә, яңы тормош, ир ҡатыны бурыстары мине һине онотторға ярҙам итер тип ашыҡтым. Ярҙам иткәндер ҙә, бәлки... Буш ваҡытым әҙәйҙе. Әммә өс-дүрт йыл тирәһе мин йәшәмәнем, тик һине генә уйланым. Ҡыҙым булмаһа, йәшәй ҙә алмаҫ инем, моғайын... Әле мин бер ҙур компанияла эшләйем. Насар йәшәмәйбеҙ. Ирем менән күптән айырылыштыҡ. Ҡыҙым ҙур инде хәҙер, айырым йәшәй. Университетта уҡый.

Мир үҙенең тормошо тураһында һөйләне, эшен, иптәштәрен, ғаиләһен. Ҡыҙҙарының ҡыҙыҡтарын һөйләп көлдөрҙө. Немец телен онотмауына үҙе лә аптыраны.

Юрген ҡарт менән әбейен һорашты, байтаҡтан мәрхүм икән инде улар.

- Йорттарын һаттым, ҡайтҡаның юҡ, - тине Иоланта. - Үлгәнсе һине иҫләнеләр, хәбәр көттөләр.

- Хәбәр? Ниндәй хәбәр?

- Иҫләйһеңме, улар һинән минең ағайым, һуғыштан ҡайта алмаған ағайым тураһында белешеүеңде үтенгәйнеләр?

- Иҫләмәйсә... Мин уның аккордеонында уйнаным... Иоланта, мин бит ағайыңдың ҡайҙа үлгәне, ерләнгәне хаҡында СССР-ға ҡайтҡас, эҙләп, табып, хәбәр иттем. Исемен яҙманым, әлбиттә, сөнки һәр хатты уҡып, шунан ғына сит илгә ебәреүҙәрен белә инем. Һин һораған кеше үлгән, шунда ерләнгән, тигән хатты алманыңмы ни?

- Алдым. Ҡарттарға ла алып ҡайтып уҡыттым. Тик улар барыбер көттө. "Хәбәрһеҙ юғалғандар" бер килеп ҡайта. Улыбыҙ ҙа ҡайтыр, табылыр, тинеләр. Бигерәк тә әсәйем һуңғы минутынаса көттө... Мин ағайым һәләк булғас тыуған бала, уны белмәгәс, ул ҡәҙәр өҙгөләнмәнем. Мин һинең өсөн өҙгөләндем. Ә улар ағайым өсөн...

Иҫенә төштө Мирҙың. Хәрби разведчик исеме юҡҡа ғына бирелмәй. Серле материалдарҙы улар эҙләй ҙә, таба ла белә. Иолантаның ағаһы һуғышта һәләк булмаған, әсиргә төшкән икәнен ул оҙаҡламай асыҡланы. Себерҙә лагерҙа булған, өс йылдан ашыу ваҡыт үткәс, туберкулездан үлгән. Әммә был турала яҙыу бик ҡурҡыныс ине... Мөмкин булмаған эш. Шуға күрә Мир уның үлем хәбәрен һәм ҡайҙа ерләнгәнен генә яҡынса яҙа алды. Ысынын, әсиргә төшөүен ул әле лә Иолантаға әйтә алманы. Һәләк булған тип ышанған икән, шулай булһын... Буш хәсрәттәр, бөтәшкән яраны ҡуҙғытыу кемгә кәрәк? Унан кемгә еңеләрәк булыр!

Әңгәмәләшенең уйға сумыуын күреп, ҡатын тынлыҡты боҙҙо.

- Атайым һине гел иҫләне. Аккордеонды барып һыйпап тора ла, һинең уйнағанды, йырлағанды иҫкә төшөрә. Миңә был инструментты башҡорт улыма бирәһе булған, уйнар ине, былай туҙып, иҫкереп ятмаҫ ине, тип ҡуя торғайны. Өйҙә һатҡанда мин ул аккордеонды алып ҡалдым, әле минең мансардамда һаҡлана. Мир, теләһәң алып ҡайт һин уны. Атайым Юрген ҡарттың, минең иҫтәлеге итеп.

- Юҡ, - тип баш сайҡаны Мир. Оҙаҡ ултырҙы өнһөҙ. - Юҡ. Үткәнде кире ҡайтарыу мөмкин түгел. Нисек булған, шулай ҡалһын.

- Мир, ә һин мине хәтергә төшөрә торғайныңмы? Һағындыңмы? - Ҡатын нимәлер өмөт итеп уның күҙҙәренә ҡарарға тырышты. Мир юрый уны инҡар итте. Ҡараманы.

-Ваҡыт булманы. Беҙ илде төҙөкләндерҙек. Эшләнек тә эшләнек, иген иктек. Илебеҙ һаман ас ине, - тине ул асыу ҡатыш. Иоланта янында күңелендә яралған килешмәүсәнлек тойғоһо йәнә баш ҡалҡытты. - Беҙҙә тормош бындағы кеүек еңел булманы. Тир түктек! Буш хыялдарға урын ҡалманы...

- Ғәфү ит! - тип шыбырҙаны ҡатын. - Мин һине яратыуҙан туҡтаманым...

**(Дауамы. Башы 45-51-се һандарҙа).**

**✓ Иҫ-аҡыл китеп аптырап ултырған арала ҡайным яйлап барыһын да төшөндөрөп бирҙе. Һәм мине үҙ яйыма ҡалдырып, өйгә инеп китте. Ә эштең әтнәкәһе бына нимәлә икән... Уны һеҙгә аңлатып ҡына өлгөрөп булманы.**



ӘЙҘӘГЕҘ!

# ҒАИЛӘ ЫҒЫ-ЗЫҒЫЛАРЫН...

## йырлап көйләйек!



Минең ҡайным бик ҡыҙыҡ кеше ул. Ул һәр ваҡыт йылмайып, берәү әйтмешләй, ауыҙ сите менән генә көләмһерәп йөрөй. Ә үҙе һәр ваҡыт шат. Етмәһә, гел генә мөңгөрләп нинДәйҙер йыр көйләй. Әллә күңеле шулай моңло, әллә үҙе шулай йыр ярата, белмәҫһең уны. Ә бына унын асыуланған сағын бик һирәк күрәм. Дөрөҫөрәге, бөтөнләй күргәнем юҡ. Ә бына мин яман нык асыуланам. Әйтеүе лә оят, хатта ваҡыты менән ҡысҡырып ҡуям. Ҡайһы ваҡыт көләшкә шул хәтлем тауыш күтәрәм, хатта минең ошо баритон тауыш (әллә бас микән) ауылдың теге осонда ла ишетелә. Быны ишеткән кешеләр үҙҙәре һөйләй. Ауыл осона ишетелерлек тауыш сығарыу өсөн йәндә шул хәтлем көслө асыу, ә күкрәккә апаруҡ киңлек кәрәктер. Ә былай беҙҙең ауыл әллә ней ҙур түгел. Ваҡыты менән шыбырлап ҡына әйткән һүҙ ҙә ауылды йөшен тиҙлегендә урап сыға.

Ә нимәгә шул хәтлем ҡысҡырағыһың һуң, тип һораусылар булыр. Һеҙгә сер итеп кенә әйтәм: көләш аптырата! Тыныс ҡына эшләп йөрөгән мәлдә килә лә нервыларҙы ҡаҡшата башлай. Тәүҙә ябай ғына һүҙҙәр теҙә. Аҙаҡ һүҙ артынан һүҙ китә. Иң аҙағы талашыу менән тамамланып ҡуя. Теге юлы берәү, ахыры заман етер алдынан кемде һөйләйһең, шул алдына килер, тигән булғайны. Көләмһерәп ҡуйғайным. Үәт әй, әйтеүҙәре хаҡ булған бит. Ана, көләш үҙе килә лә ята минең янға. Хәҙер башлана инде үтмәҫ бысаҡ менән игәү. Эшләр эшкә һәм йылдың миҙгеленә ҡарап, беҙҙең "йәнле һөйләшеү" сама менән ошолайыраҡ бара: Таҡтаны тигеҙ сөйләмәйһең бит (Минең яуап шулай: "Күҙкәйҙәрең ҡыйыш булғанға мин ғәйепле түгел"). Иҙәнде дөрөҫ туҙшәмәгәнһең ("Беләм, беләм, тикшереү өсөн генә һалып ҡуйғанмын"). Нишләп кисә эштән һуң ҡайттың? ("Бергә эшләгән иптәштәр менән һыу инеп ҡайтыуҙан ней булған?") Нисек башыңды юғалтманың? ("Һуң уны муйын тотоп тора ла инде"). Һыйырҙы нишләп көтөүгә еткерә ҡыуманың? ("Ярай, бар ҡайт, үҙем ҡыуам, тигән күршегә нисек юҡ тип әйтәһең инде"). Бесәнде ҡасан һарай башына алаһың? ("Һарай эргәһенә килеп ултырған көбән ҡасып китмәҫ, алырмын әле сентябрь аҙағында"). Утынға ҡасан барырға уйлайһың? ("Барырмын, әле утынлыҡта бер ҡышлыҡ кипкән утын ята"). Малайҙарын ҡарап ҡына йөрөтәр тиһәм... ("Күҙ яҙлыҡтырмай ҡарап торҙом, хатта күҙҙәрҙең алмалары арып китте"). Һин был эште онотманыңмы? ("Онотоу ҡайҙа, арҡаға ятһам да, эсемә ятһам да онота алмайым, ҡабырғаға ятып ҡарарға микән, тип уйлап йөрөйөм әле"). Башҡаларҙың ире ир һымаҡ (Ана шул башҡаларға сығыр кәрәк булған"). Шулай шул, ана шул С.-ға сығырға кәрәк булған миңә ( "Ә С. һине алам тип йән-фарман һыбай сабып килгән бит инде. Атын әйтәм, һине күреп ҡалғас, әрккән һәм йән-фарманға кирегә сабып сығып киткән"). Ир тип тә әйтеп булмай бит һине ("Ә шулай ҙа күршеләр, һин урамыбыҙҙың йәме, тип ҡыуана"). Шуға аптырайым. Бына ошондай, берәү әйтмешләй, беспощадно талашҡан аҡытта, әйтәм тиһән, һүҙе табылып ҡына тора бит әле.

Бына ошолай йәшәп ятыла. Ваҡыты менән көләш ике-өс көн һөйләшмәй йөрөп ала. Ваҡыты менән, берәү әйтмешләй, мин нимуй. Бына ошолай һәүетемсә генә йәшәп ятҡанда бер көн көләш ҡәйнәмдәргә ҡайты ла китте. Артынан бер биҙрә көл һибеп ҡалғанда йәтеш булыр ине. Уныһы кәрәк сағында ҡул аҫтында ғына булманы. Көләш бер көн ҡайтманы. Ҡайтмауына ике көн булып китте. Кис-иртәнсәк һыйырҙы килеп һауа ла, һөтлө биҙрәне тып иттереп туфаға ултыртып, өйгә лә инмәй, шыҡылдата баҫып сығып киткән була, берәү әйтмешләй, зараза. Мин ул биҙрәне шунда уҡ һалҡынға ултырта һалам. Кис эштән ҡайтыуыма ике малайым йүгереп килә. Беҙ һөттөң өҫтөнә йыйылған ҡаймаҡты икмәк телеме өҫтөнә һөртәбеҙ, унын өҫтөнә бер аҙ шәкәр һибәбеҙ һәм рәхәтләнеп (хатта ләззәтләнеп) көйшәйбеҙ. Һөт-шәкәрҙе әйтәм, бер аҙ түгелә инде. Түгелһә лә ризабыҙ. Сөнки арттан әрләп торған кеше юҡ. Рәхәт!

Әммә бындай рәхәтлек оҙаҡҡа барманы. Яңғыҙ йәшәп ятыуҙың өсөнсө көнөнә күңелдә ниндәйҙер болоҡһоу баҫып алды. Сәбәбен аңлай алмай эт булыңды. Ә сәбәбе ябай. Йә һыуыҡ тейҙе, йә эсе һуҡты. Шул ваҡыт башҡа ошондай ҡурҡыныс уй килә - әллә көләште юҡһынам инде? Бындай уйҙан үҙем ҡурҡа төшәм. Ҡуй, булмаҫ, тип ҡул һелтәйем. Тора биргәс, көлә биреп ҡуям. Үәт әй, кеше ышанмаҫтай нәмәне уйлап торам бит әле. Ундай көләштең, берәү әйтмешләй, ундай бисураның нимәһен юҡһынаһың инде? Әрләүҙән башҡа нимә белә ул! Был уйҙарҙан тыныслана биреп ҡуям. Ә шулай ҙа көләш ҡайта ҡалһа, ҡабат уға ҡаршы бер һүҙ ҙә өндәшмәҫ кәрәк. Йөрәһөн әйҙә үҙ йәйына һөйләнеп. Бары тик ҡайтһын ғына!

Көләш ҡайтты. Дөрөҫөрәге, үҙем барып алдым. Эштән ҡайтышлай юҡ һылтауҙы бар итеп, ҡәйнәмдәргә инеп сыҡтым. Йәнәһе лә, кисә быҙау ҡайтманы. Шуға ҡайғырып йөрөйөм, йәнәһе. Был яҡта күренмәнеме икән, тип аптырап инеп тороуым, тигән булдым уфтанып. Ҡәйнәм менән ҡайным рәхмәт инде. Минең хәлде аңлап, юҡ эштәрен бар итеп, өтәләнә баҫып өйҙән сығып киттеләр. Көләш менән өйҙә икәү яңғыҙ ҡалдыҡ. Ә ул торғаны бер әртис инде. Миңә сығып ҡына әрәм булған. Ай-һай, бигерәк килешерә. Әле бына ҡыҫынҡы күҙҙәрен шарҙай итеп асып, "һағынышлы" күҙҙәре менән миңә ҡарап тора. Бот сабып, ул быҙау ҡайҙа булыуы бар икән, тип, минең менән бергә "ҡайғыра". Өйгә күҙ йөрөтөп сыға. Ихласлап эҙләй башлаған була. Бәлки, мейес артында торалыр, тигән булып унын артын ҡарай. Ҡушһаң, эшләмәҫ ине. Ә хәҙер йыбанмай. Тубыҡланып, урындыҡ аҫтына күҙ һала. Яҫтыҡ-ҡаралты өҫтөнә һуҡкылап ҡуя. Хатта түнкәрелгән сынаяҡты күтәреп ҡарай. Аҙаҡ, юҡ шул, был тирәлә күренмәй быҙау, тип уфтанып ҡуя. Ярай, тигән булам, был тирәлә күренмәгәс, башҡа ерҙән эҙләрмен. Аптырап, өйҙән ишек алдына сығам.

Ошо ерҙә кемдер берәү, хәбәрендә йырсы ҡайнымдан башланын, ә үҙең унын мыжыҡ ҡыҙын һөйләүҙән бушамайһың, тип әйтеп ҡуйыр. Юҡ, йырсы ҡайным бер ергә лә китмәгән. Ана, ул мине аласыҡ эсенән ихлас йылмайып ҡул болғап саҡырып тора. Баҡтиһәң, ҡәйнәм дә бында икән. Мәйтәм, ҡыҙҙарына төкөрөп бирәйем. Ҡайным менән ҡәйнәм һәйбәт. Ҡыҙҙарына дөрөҫ тәрбиә бирә алмаһалар ҙа, ана бит, рәхмәт яуғырҙары, самауыр ҡуйып ебәреп, мине көтөп ултыралар. Индем аласыҡҡа. Ә әртис ҡыҙҙарына төкөрөп бирәйем. Әйҙә йөрөһөн әйҙә юҡ быҙауҙы эҙләп! Шул кәрәк уға. Үсем! Сәй эсеп алғас, кәйеф бермә-бер күтәрелеп китте. Тамаҡҡа хуш иттек тә ҡайным менән ишек алдындағы эскәмйәгә сығып ултырҙыҡ. Киске тынлыҡҡа һоҡланып, бер аҙға тын ҡалдыҡ. Әлбиттә, ҡайным беҙҙең ғаиләлә һауыт-һабаның бер аҙ шылтырап алғанын аңлай. Шуға мин, берәү әйтмешләй, был оло быуын һүҙҙе нимәнән башлар икән, тип уйлап ултырам әле. Шул саҡ ҡайным миңә бер аҙ борола биреп, ошолай әйтә ҡуйҙы.

- Кейәү, әйҙә мин һине йырларға өйрәтәм.

Был көтөлмәгән һүҙҙәрҙән саҡ көлөп ебәрмәнем... тип алдап булмай. Рәхәтләнеп, берәү әйтмешләй, һын ҡатҡансы көлдөм генә. Былай ҡуптан көлгән юҡ ине. Кейәү, матур йәшәгеҙ, тип өйрәтәһе урынға, мин һине йырларға өйрәтәм, тип ултыра бит әле, берәү әйтмешләй, был ҡартбаш. Йәшермәйем, моң бар минең күңелдә. Хатта урғылып ята. Әммә, моңло бала бәхетһеҙ була, тигәндәре генә бер аҙ ҡурҡыта. Шуға йырламайым мин. Бер аҙ тынyслана биргәс, ҡайныма ҡарайым.

- Эй, кейәү, алма ағасынан алыҫ төшмәй бит ул.

Был һүҙҙәр мине уйландыра төшә. Шул арала ҡайным һүҙен дауам итә.

- Йәш саҡта мин дә ошолай бер аҙ ыҙалап алдым. Йыр ҡотҡарҙы мине. Ә йырларға ҡайным өйрәтте. Хәҙер һинең сират инде, кейәү.

Үәт әй, берәү әйтмешләй, кисә үлһәм, бөгөн белмәҫ инем. Иҫ китмәле, йырсылар араһында йәшәп ятам икән мин. Өлкән ҡайным йырлаған, үҙемдең ҡайны йырлап йәшәй, хәҙер миңә лә сират еткән, имеш. Иҫ-аҡыл китеп аптырап ултырған арала ҡайным яйлап барыһын да төшөндөрөп бирҙе. Һәм мине үҙ яйыма ҡалдырып, өйгә инеп китте. Ә эштең әтнәкәһе бына нимәлә икән... Уны һеҙгә аңлатып ҡына өлгөрөп булманы. Сөнки өйҙән сәсрәп көләш килеп сыҡты.

- Мин быны быҙау эҙләргә сығып киткән, тиһәм. Ә ул ултыра йәйелеп бер эскәмйә булып. Әйтмәһән, билләһи, иҫе китеп, көнө-төнө ултырасаҡ.

Мин ошо мәл эстән урғылып килеп сыҡҡан һүҙҙәрҙе көскә тыйып өлгөрәм. Бына хәҙер миңә йырсы ҡайным өйрәткәнсә берәй йыр башҡарырға кәрәк. Әммә кәрәкле мәлдә кәрәкле йыры, унын һүҙҙәре иҫкә төшәме әле ул. Шул мәл көләштең "көнө-төнө" тип әйткән һүҙҙәре ярҙамға килә. Һәм мин бына ошо йырҙы көйләй башлайым.

Көн булайыммы һиңә,
Төн булайыммы һиңә,
Татлы төшөңдәй ҙә татлы,
Өн булайыммы һиңә!

Көләш миңә бер килке иҫе китеп ҡарап тора. Шунан, бынан булмай, тигәндәй, ҡулын һелтәп, үҙебеҙҙең өй яғына ыңғайлай.

Бына ошо көндән беҙҙең тормош әрәтләнеп китте бит, әй. Әлбиттә, көләш мине һәр ваҡыттағыса "маҡтап" тора. Ә бына мин уға ҡаршы яуап бирмәйем. Ә тыныс ҡына үҙ яйыма йыр көйләп эшләп тик йөрөйөм. Бына, әйтәйек, ара-тирә ошо йырҙы башҡарып ҡуям. Һүҙҙәрен үҙгәртмәйем, ә мәғәнәһе барыбер ярылып ята. Уныһы йәйә эсендә бирелә.

Килә яуа, килә яуа, (Килә маҡтай, килә маҡтай),
Эйәләште бер болот. (Эйәләште был көләш).
Осар ҡанаттарым булһа, (Осар ҡанаттарың булһа),
Тормаҫ инем бер минут. (Осор инең бер сәғәт).

Ҡайһы ваҡыт йырҙың һүҙҙәрен бер аҙ үҙгәртеп ебәрәм. Теге юлы, күршеләргә сәйгә инеп сығам, тигәс, ошолай көйләп ҡалдым.

Ҡунаҡтарға барһаң - һыҙғырып кер,
Тешкәйҙәрең осоп китмәһен.
Сит ерҙәргә йөрөһәң - яҡшы йөрө,
Һоҡланмаған кеше ҡалмаһын!

Ә бына был йырға ваҡыты менән көләш хатта үҙе лә ҡушылып китә. Шуныһы ҡыҙыҡ, нимәгә килгәнен, нимәгә "маҡтап" торғанын да онота. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ әле. Бына ошо йырҙан һуң нисек һүҙ көрәштереп тормаҡ кәрәк!

Ғүмер берәү, икәү түгел ғүмер,
Йәшендәрҙәй кәрәк йәшәргә!
Шул ғүмерҙең ҡәҙерҙәрен белеп,
Йәшәргә лә әле йәшәргә!

Бына шулай, йырлап асыла күңел, тип халыҡ бушҡа әйтмәй икән. Йырлай торғас, шуны һиҙеп ҡалдым. Халҡыбыҙҙың мәғәнәле һәм тормоштоң һәр бер ығы-зығыһына ҡағылышлы йырҙары күп икән. Әле бына шуны уйлап ултырам. Кем белә, бәлки, ҡайнымдың был кәңәше (хәҙер ул минең дә кәңәш) ҡайһы бер гәзит уҡыусыларға ла ярҙам итер. Әйҙәгеҙ...

Һөйләүсене
Әгләм ШӘРИПОВ
тыңлап торҙо.

ИНТЕРНЕТТАН



# СӘЙ ЭСЕГЕҘ

■ Яңы Зеландия парламенты 2009 йылдың 1 ғинуарынан һуң тыуғандарға тәмәке һатыуҙы тыйыусы закон ҡабул итте. Әлеге көндә тәмәке һатҡан 6 мең сауҙа нөктәһенең 10 тапҡырға кәмеүе көтөлә. Мәғлүмәттәргә ярашлы, бөгөн илдә өлкән йәштәге халыҡтың 8 проценты ғына тәмәке тарта, 10 йыл элек ваҡыт менән сағыштырғанда, был ике тапҡырға кәмерәк. Дәүләт Думаһына ла электрон сигареттарҙы онлайн һатыуҙы тыйыу тураһында тәҡдим булғайны. Парламентарийҙар әйтеүенсә, электрон сигареттар зарары йәнәтенән ғәҙәти тәмәкенән айырылмай. Медицина фәндәре кандидаты Евгения Кулакова билдәләүенсә, вейптар йөрәкҡан тамырҙары һәм тын алыу системаһы сирҙәре артыуына һәм йәшәреүенә сәбәпсе.

■ Сәй Ер йөҙөндә иң ҡулланылған эсемлек. Шартына килтереп, сәй эсеп алыуҙан кәйефтәр күтәрелә, быны барыһы ла яҡшы белә. Төрлө илдәрҙә сәйгә арналған тикшеренеүҙәр ҙә йыш үтеп тора. Донъяла 40-тан 69 йәшкә тиклемге кешеләрҙең 85 проценты ҡара сәйҙе даими эсә икән. Көнөнә 2 сынаяҡ һәм унан да күберәк сәй эскәндәр араһында ваҡытынан алда үлем осраҡтары бермә-бер кәмей. Быға тиклем сәйҙе һөтһөҙ һәм шәкәрһеҙ эскәндә генә файҙаһы була тигән фекерҙәр бар ине. Әммә һуңғы осорҙа ғалимдар быныһын да кире ҡаға. Сәй һәр кешенең сәләмәт тукланыуының бер мөһим өлөшө була ала, ти улар. Шуға ла, сәй эсеп алайыҡ, тигән бер саҡырыуҙан да баш тартмаҫҡа кәңәш итәбеҙ.

■ Кофеин эшкә һәләтлелекте арттырыусы булып иҫәпләнә. Спортта юғары уныштарға өлгәшергә лә ярҙам итә ул. Нейромаркетологтар уның ошо сифатын күҙ уңында тотоп, үҙҙәренең эшендә файҙаланмаҡсы булған. Магазинға әйбер артынан килеүселәрҙең ҡылығын да үҙгәртеп ебәрә алмаҫмы тигән уйҙан сығып, ҡыҙыҡлы тикшеренеү үткәрелгән. Магазинға инә торған ерҙә бушлай ҡаһуә таратҡандар. Тик уның ҡайһыларында кофеинһыҙ ҡаһуә булған. Кофеинлы ҡаһуә эсеп алған һатып алыусылар әйберҙе күберәк һатып алған, тимәк, магазинда аҡсаһын да күберәк ҡалдырып киткән. Улар күбеһенсә күңел күтәрә торған әйберҙәр алған, мәҫәлән, шоколад, еңел майшөмдәр, парфюмерия. Шуға ла магазинға сығыр алдынан ҡаһуә эсмәгеҙ, был һеҙҙе кәрәк булмаған әйберҙәр һатып алып, аҙаҡтан үкенеп ултырыуҙан ҡотҡарасаҡ.

■ Донъяла һимеҙлек менән яфаланыусы балалар арта. Белгестәр быны хәрәкәт булмауы һәм тәм-том ҡапҡылап алыу ғәҙәте менән аңлата. Бындай сәләмәтлеккә бер файҙаһы ла булмаған ризыҡтар ҡулланыу баланың кәйефе үҙгәреп торора бәйле булыуы ла ихтимал. Һынауҙарҙа 3-6 класс уҡыусылары ҡатнашҡан. Ял көнөндә улар телефондың махсус ҡушымтаһы аша үҙенең кәйеф торошо һәм яңы ғына нимә ашауы һәм эсеүе тураһында мәғлүмәт еткергән. Зыянлы ризыҡтар араһында тәүге урынды тәм-том һәм татлы эсемлектәр алған. Икенсе урында майҙа ҡыҙҙырылған ризыҡтар тора. Майҙа ҡыҙҙырылған ризыҡҡа өҫтөнлөк биргән мәлдә бала кире тойғолар кисергән була. Тимәк, насар кәйеф ваҡытында балалар зарарлы тип иҫәпләнгән тәм-том, чипсыларҙы күберәк ашай. Насар кәйеф - һимереүҙең бер сәбәбе булып тора.

ЫШАННАҢ - ЫШАН!

# ЙОМШАҠ, ТЫНЫС, ЙОРТАУАЙ!

**Тотороҡһоҙ, ни уйлағанын да белеп булмаған, тыштан тыныс күренһә лә, теләһә ниндәй минутта ҡорбанына ташланырға әҙер торған Юлбарыҫ, нисек кенә ажарланып, аҙау тешен күрһәтергә маташмаһын, шөкөр, уның китер мәле лә етте. Төрлөнө булды. Рәсәйҙе үҙҙәре теләгән рәүешкә бороп, үҙ шарттарын ҡуймаҡсы, ресурстарыбыҙ һәм илебеҙ яҙмышын ҡулға төшөрмәксе коллектив Көнбайышҡа ил ҡеүәтен ҡаршы ҡуйыу, Ватаныбыҙҙың үҙаллылығы һәм азатлығы хаҡына илһөйәрлек, ватанға тоғролоҡ традицияларын раҫлау өсөн кәрәк булған Махсус хәрби операция менән өлөшләтә мобилизацияны ла, ошо юлда йәндәрен фиҙа ҡылған арыҫландай улдарыбыҙ ҡайғыһын да кисерергә тура килде Юлбарыҫ йылында.**



Шул уҡ ваҡытта ғәҙеллек яҡлы Рәсәй көслә символ эйәһе Юлбарыҫ ҡурсалауында булды, ти астрологтар. Хоҙай Тәғәлә насип иткән ризыҡнигмәттәр, уңыш һәм муллыҡ осоро ла булды бит 2022 йыл. Шунан нимә әйтәһең был йылға? Уның ҡарауы, ажарлы йыл хужаһына алмашҡа йомшаҡ, тыныс, бәхәс һәм конфликттарҙы ене һөймәгән, хәстәрлекле, йортауай ғаилә һаҡсыһы булараҡ танылған Ҡуян килә! Йомшаҡҡай булыуына ҡарамаҫтан, кәрәк саҡта, айырыуса, әгәр биләмәһенә һәм хоҡуҡтарына хәүеф янаһа, йортон һәм ғаиләһен яҡлап, ҡыйыу "һуғыш суҡмары"на әүерелеүе лә ихтимал, ләкин нимә генә тимә, Ҡуян барыбер емереүсе түгел, ә ижад итеүсе, оя ҡороусы сифатына тоғро булып ҡала һәм һуғышсан Юлбарыҫ һалған яраларҙы ялап, имләп, именлеккә юл һалыр, тип өмөт итәйектәр. Ә шулай ҙа аҡыллы Ҡуян менән уртаҡ тел табыу, уның ҡурсалауында булыу өсөн әҙәм балаһынан ниндәй сифаттар талап ителә һәм был йылда көнсығыш йондоҙнамә билдәләрен ниҙәр көтә?

***СЫСҠАН (1936, 1948, 1960, 1972, 1984, 1996, 2008, 2020):*** 2023 йылда уның игтибар үҙегендә йорто һәм ғаиләһе булыр. Тылды нығытыу сыҫҡанға үҙен ышаныслы тоторға, уңыш һәм ихтирам яуларға ярҙам итәсәк. Был йыл йорт, фатир һатып алыу, ремонт, төҙәлөш һәм унайлыҡтар булдырыу эштәре менән үтәсәк. Үҙгәреп торған бөгөнгө донъяла өй һәм ғаилә һеҙҙең тотороҡлолокто һаҡлар, үсешегеҙҙе тәьмин итеүсе терәк булыр. Көсөгөҙҙө йорт яны баҡсағыҙҙа, шәхси участка ерегеҙҙә эшләүгә туплағыҙ. Ошо йылда нәҫел тарихығыҙҙы өйрәнеүгә күңел һалып, быуындар бәйләнешен нығытығыҙ, ата-әсәгеҙҙе, туғандарығыҙҙы - бөтөн ғаиләгеҙҙе бергә ойоштороп, хәстәрләүсе үҙәккә әйләнерһегеҙ.

***ҮГЕҘ (1937, 1949, 1961, 1973, 1985, 1997, 2009, 2021):*** Был билдәне ваҡиғаларға бай йыл көтә: ҡыҙыҡлы, файҙалы кешеләр менән осрашырһығыҙ, ниндәйҙер ваҡиғалар үҙегендә ҡайнарһығыҙ. Был йылды белем йә өҫтәмә мәғлүмәттәр, күнекмәләр алыуға арнағыҙ: семинарҙарға, тренингтарға йөрөгөҙ - киләсәктә быларҙың кәрәге тейеүе ихтимал. Күберәк уҡығыҙ һәм мәғлүмәт сығанаҡтарының асылына төшөнөргә тырышығыҙ. Киләсәктә, бәлки, яҙыу һәм әҙәби өлкәлә үҙегеҙҙе һынап ҡарарға теләрһегеҙ, йә булмаһа, мәғлүмәт ресурсығыҙҙы булдырып, күптәнгә хыялығыҙҙа, шулай уҡ уңышҡа өлгәшерһегеҙ һәм ихтирам ҡаҙанырһығыҙ. Машинала, поезда сәйәхәтегеҙ онотолмаҫ тәьсораттар ҡалдырыр.

***ЮЛБАРЫҪ (1938, 1950, 1962, 1974, 1986, 1998, 2010, 2022):*** Тыуып килгән йыл һеҙгә аҡса эшләргә мөмкинлек бирә, уны файҙаланырға тырышығыҙ. Ҡулығыҙға аҡса төшһә, уны сарыф итергә ашыҡмағыҙ, киреһенсә, килем-сығымдарығыҙҙы иҫәпләп, мөмкин тиклем аҡса туплап ҡалырға ынтылығыҙ һәм кәрәкмәгән нәмәләр һатып алыуҙан тыйылығыҙ. Һеҙҙең бурыс - үҙегеҙҙең финанс хәүефһеҙлегегеҙҙе тәьмин итеү. Был бөгөнгө

ӘЙҘӘГЕҘ!

# ТАБЫНЫҒЫҘҘА КИШЕР КҮРҺӘ...

## йыл хужаһы ҡәнәғәт ҡалыр



**Башҡорт ғаиләһендә Яңы йыл табыны ниндәй булырға тейеш? Яңы йыл табыны һыйҙан һығылып торорға тейеш, сөнки йылды нисек ҡаршы алаһың, ул шулай була, тигән ырымға ышанып йәшәй бит халыҡ. Әлбиттә, йәшерәк саҡта мин дә шулай уйлай инем, әммә хәҙер саҡ ҡына икенсерәк фекерҙәмен. Бөтә нәмәлә сама булыуы мөһим.**

Беҙҙең байрам өҫтәлендә мотлаҡ бишбармаҡ, буҙа, ҡымыҙ, баллы сәк-сәк йәки бауырһаҡ кеүек башҡорт халыҡ аштары урын ала. Элегерәк өҫтәлдә тик магазиндан алынған ризыҡ урын ала ине, бөгөн иһә үҙ ҡулдарым менән бешергәндәренә өҫтөнлөк бирәм. Алдан уҡ тултырма эшләп, туңдырып ҡуям, ҡаҙы һатып алам. Тултырылған ҡаҙ быға тиклем традицион ризыҡ була торғайны. Хәҙер был ризыҡтан баш тарттыҡ. Ит әрәм-шәрәмгә китә. Бешереп, һурпаһын ҡоротлап эсеүгә етмәй. Ҡоротто ла күпләп әҙерләп ҡуям. Уны йәшел тәмләткестәр, ҡара, ҡыҙыл борос менән йомарлап, бәләкәй контейнерҙарҙа туңдырам. Был һөт ризығын бөтә ғаиләбеҙ менән яратабыҙ.

Шулай ҙа байрам табынын Йыл хужаһы нимә ярата - шуға ҡарап та әҙерләргә тырышам. Динебеҙ йондоҙнамәгә ышаныуҙы тыйһа ла, Яңы йыл ул тылсымға, мөғжизәгә бай байрам бит ул.

Быйыл - Ҡуян йылы. Йомшаҡ ҡуян, аҡ ҡуян беҙгә ҡунаҡҡа килгән... Яңы йыл иртәләктәрендә балалар яратып һөйләгән шиғырҙарҙың береһе шулай тип башлана. Билдәле булыуынса, һәр ун ике йыл һайын берәр йәнлек исемен йөрөткән йыл ҡабатланып килә. Беҙ ҡаршы алырға әҙерләнгәне - шиғырҙағынан айырмалы Ҡара һыу ҡуяны. Уны кемдер йорт ҡуяны йылы тип тә ебәрә. Минең улым балалар баҡсаһына йөрөгәндә лә ҡаршыланыҡ бындай символды йөрөткән яңы йылды. Тәрбиәселәре балаларға ятларға шиғырҙар таратҡанда минең улыма эләкте ул. Тәғәйенләнгән көн килеп еткәс, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу алдына сығып:

✓ ***Шуға күрә зарланмағыҙ һәм яуаплылыҡты башҡаларға япһармағыҙ. Идара итеү дилбегәһен үҙ ҡулдарығыҙға алығыҙ һәм маҡсатығыҙға табан атлағыҙ.***

ҡатмарлы заманда үҙегеҙҙе ышаныслы тойорға ярҙам итер. Бурысҡа алыу, кредиттар менән булышмағыҙ, үҙ хәлегеҙгә таянығыҙ, шул саҡ күберәк аҡса эшләрһегеҙ һәм кәрәкле нәмәләрегеҙҙе һатып алырһығыҙ. Үҙ эшегеҙҙе асырһығыҙ йә булмаһа, өҫтәмә килем сығанағы булырҙай яҡшы эшкә урынлашырһығыҙ.

***ҠУЯН (1939, 1951, 1963, 1975, 1987, 1999, 2011):*** Был һеҙҙең өсөн ифрат та мөһим йыл булмаҡсы. Әле һеҙ бөтә нәмә: уңыштарығыҙ һәм ҡаҙаныштарығыҙ өсөн дә, хата һәм яңылышлыҡтарығыҙ өсөн дә үҙегеҙ яуап бирәһегеҙ. Шуға күрә зарланмағыҙ һәм яуаплылыҡты башҡаларға япһармағыҙ. Идара итеү дилбегәһен үҙ ҡулдарығыҙға алығыҙ һәм маҡсатығыҙға табан атлағыҙ. Әгәр һеҙҙең күптән уйлап та бойомға ашыра алмайынса йөрөгән пландарығыҙ булһа, ең һыҙғанып әле тотонорға форсат тыуа. Үҙ аҡылығыҙ, үҙ фекерегеҙгә тоғро булып ҡалығыҙ, шул осраҡта башҡалар һүҙенә лә ҡолаҡ һалығыҙ, тик барыбер йөрәгегеҙ ҡушҡанса эшләгеҙ.

***АЖДАҺА (1940, 1952, 1964, 1976, 1988, 2000, 2012):*** Килеп еткән был йылда "ҡулөгәгә" китеп тороғоҙ, әллә ни ҡуҙғә салынып бармауығыҙ хәйерлерәк булыр. Үҙ тормошоғоҙҙо ҡуҙҙән үткәрегеҙ, иғтибар үҙәгендә булмаҫҡа тырышығыҙ. Аулаҡ ҡалып уйланығыҙ, тәбиғәттә булығыҙ, рухи күнекмәләр үҙләштерегеҙ - был һеҙгә көс-ҡеүәт кенә өҫтәр. Эске донъяғыҙға бирелегеҙ, мәңгелек ҡиммәттәр хаҡында уйланығыҙ, ғибәҙәт ҡылығыҙ, медитация менән шөғөлләнегеҙ, изге китаптар уҡығыҙ һәм үҙегеҙҙе борсоған хәүефле уйҙарығыҙҙан арынырға тырышығыҙ: йыл тыныс буласаҡ һәм һәүетемсә үтәсәк. Һеҙҙең дә күңел донъяғыҙ нурланыр, үҙегеҙҙә көс-ҡеүәт өҫтәлеүен тойорһоғоҙ.

***ЙЫЛАН (1941, 1953, 1965, 1977, 1989, 2001, 2013):*** Һеҙҙе ғәҙәттән тыш ҡыҙыҡлы, күнелле осор көтә, күнеккән тормош тәртибегеҙ ҡапыл баштан - аяҡ үҙгәрер һымаҡ, тик ҡурҡмағыҙ: үҙгәрештәр фәҡәт яҡшыға ғына буласаҡ, тәүҙәрәк быға ышаныуы ҡыйынраҡ тойолһа ла. Ҡуян йылында ниндәй генә тетрәнеүҙәр булған хәлдә лә, улар һеҙгә артабанғы үҫеш кимәленә сығырға булышлыҡ итер. Был осор һеҙҙең ҡулдан килмәгән эш булмаясаҡ: яҙмыш һеҙгә хыялығыҙға яҡынларға мөмкинлек бирә, ә яңығыҙҙа һәр саҡ ысын дуҫтарығыҙ иңен тойорһоғоҙ. Фекерҙәштәр табырһығыҙ, улар һеҙгә яңы проекттарығыҙҙы атҡарырға ярҙам итер. Хәйриә эше, ихтыяжы булғандарға ярҙам күрһәтеү менән шөғөлләнеү ҙә файҙалы булыр.

***ЙЫЛҠЫ (1942, 1954, 1966, 1978, 1990, 2002, 2014):*** Йыл һеҙҙең карьерағыҙ һәм һөнәри үҫешегеҙ өсөн хәл иткес буласаҡ, ти йондоҙҙар. Иң мөһиме - үҙегеҙгә ышанығыҙ, шул ваҡытта "наполеондарса" ниәттәрегеҙ ҙә бойомға ашыр һәм тырышлығығыҙ үҙ баһаһын алыр. Бәлки, бик яҡшы һәм аҡсалы эш тәҡдим итерҙәр: баш тарта күрмәгеҙ - ҡулығыҙҙан киләсәк! Хеҙмәт вазифаһы буйынса үҫергә көс табасаҡһығыҙ, хатта ки юғары урын биләү ихтималы бар. Үҙ бизнесығыҙҙы асыу өсөн дә уңайлы ваҡыт етә. Абруйығыҙ күтәрелер һәм был һеҙгә файҙа ғына килтерер.

***ҠУЙ (1943, 1955, 1967, 1979, 1991, 2003, 2015):*** Ҡуян йылы алдығыҙҙа сикһеҙ мөмкинлектәр асыр, унда хаҡлы рәүештә үҙ урынығыҙҙы табырһығыҙ. Рухи үҫеш кимәлегеҙ яңы уңыштар килтерер. Өҫтәмә белем алығыҙ, ғилми хеҙмәт яҙырға форсат тыуа, сит ил хеҙмәттәштәрегеҙ менән осрашып, фекер алышыуҙарҙа ҡатнашыу мөмкинлеге бар. Йыл алыҫ сәйәхәттәр өсөн дә бик уңай, һеҙ был турала электән хыяллана инегеҙ - файҙаланып ҡалығыҙ: был тормошоғоҙҙо үҙгәртеп ебәреүе лә ихтимал.

***МАЙМЫЛ (1944, 1956, 1968, 1980, 1992, 2004, 2016):*** Ҡуян йылында һеҙгә бойоғорға тура килмәҫ. Ваҡыт-ваҡыты менән үҙегеҙҙе сикке һыҙатта кеүек тойһағыҙ ҙа, был һеҙгә үҙ-үҙегеҙгә ышаныс ҡына өҫтәр, рухығыҙ нығыныуын тойорһоғоҙ. Тормош алдығыҙға ҡатмарлы ғына мәсьәләләр ҡуйыуға ҡарамаҫтан, күңел ныҡлығы тап ошондай хәлдәрҙә артылғанда килер. Тормошоғоҙҙа күп нәмәне үҙгәртергә тура килер - бөтәһен дә үҙегеҙҙең яҡшыға көйләнешегеҙ хәл итер.

***ӘТӘС (1945, 1957, 1969, 1981, 1993, 2005, 2017):*** Был йылдағы иң мөһим бурысығыҙ - аралашыу мөхитегеҙҙе киңәйтегеҙ, фекерҙәштәр табығыҙ һәм шул уҡ ваҡытта дөйөм эш: бизнес асырға итәһегеҙме, әллә ғаилә ҡорорға уйлайһығыҙмы - дөйөм эш өсөн яуаплылыҡ алырға ҡурҡмағыҙ. Йәмәғәт урындарына, кеше араһына йышыраҡ сығығыҙ: буласаҡ тормош юлдашығыҙҙы йә булмаһа, эш буйынса партнерығыҙҙы шунда осратырһығыҙ кеүек. Дингеҙ янында көн торошо яҡшырғанды көтөп ултырмағыҙ, үҙегеҙ башлап аҙым яһағыҙ: эҙләгәнегеҙҙе табырһығыҙ. Юрист һөнәрлеләр эштәрендә уңышҡа өлгәшер.

***ЭТ (1946, 1958, 1970, 1982, 1994, 2006, 2018):*** Ҡуян йылында көндәлек эштәргә күмелеп, ҙур тырышлыҡ һалырға, яҡындарығыҙҙы хәстәрләргә кәрәк булыр. Мәшәҡәттәрҙән ҡурҡып ҡалмағыҙ, бөгөндән үк ваҡытығыҙ һәм мөмкинлектәрегеҙҙе барлап, теүәлләп ҡуйығыҙ. Һөнәри вазифаларығыҙҙы башҡарыу иһә тағы ла күберәк көс талап итәсәк. Яуаплы эш йөкмәтеүҙәре ихтимал, ышанығыҙ: һеҙ булдырасаҡһығыҙ! Шул уҡ ваҡытта һаулығығыҙҙы ҡайғыртырға ла онотоп китмәгеҙ: организмығыҙҙы сынытҡырығыҙ, спорт менән шөғөлләнегеҙ, медицина тикшеренеүҙәре үтеп тороғоҙ.

***СУСҠА (1947,1959, 1971, 1983, 1995, 2007, 2019):*** Был йылда үҙ күңелегеҙҙе күреп йәшәрһегеҙ. Бер аҙ ҡатмарлыҡтар булыуға ҡарамаҫтан, үҙегеҙ өсөн дә, яратҡан шөғөлөгөҙ йә ижад менән булырға ла ваҡыт табырһығыҙ. Был һеҙгә яҡшы кәйеф өҫтәр. Романтик мажаралар ҙа булып алыр тормошоғоҙҙа, бынан да баш тартмағыҙ. Үҙ исемегеҙҙе, абруйығыҙҙы нығытыу буйынса эшләгеҙ. Үҙегеҙҙе яратығыҙ һәм хәстәрләгеҙ: яңы кейем һатып алаһығыҙмы, матурлыҡ салондарына, массаж, фитнес залдарына йөрөйһөгөҙмө - ваҡыт табырға тура килер. Яҡындарығыҙҙы ла хәстәрләгеҙ, айырыуса балаларығыҙға иғтибар бүлегеҙ. Улар менән аралашыуҙан күңелегеҙ үҫер, көс-ҡеүәт өҫтәлер.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

"Йомшаҡ ҡуян, аҡ ҡуян,
Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.
Ҡолағы ҡыҫҡаҡ ҡына,
Ҡойроғо ергә тейгән...",-

тип башланы һәм яңылыш һөйләгәнен аңлап, илап ебәрҙе.

Ҡуян үпкәләмәһен өсөн ул яратҡан ризыҡтарҙы ғына бешерәсәкбеҙ тип тынысландырҙыҡ улыбыҙҙы. Киләһе йыл символының интуицияһы көслө булыуы билдәле, шуға күрә уның өсөн матурлыҡ мөһим. Был йыл шәхси тормошта үҙгәрештәр, дуҫтар, туғандар менән аралашыуҙы яҡынайтасаҡ.

Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә ҡуянды үпкәләтеп ҡуймаҫ өсөн байрам өҫтәлендә ниндәй ризыҡ ултыртыуҙы тағы бер ҡат иҫебеҙгә төшөрәйек. Йорт ҡуяны - тыныслыҡ һөйөүсе, ул йорт уңайлыҡтары, комфорт һәм бай йорт йыһаздары ярата. Ҡуяндың тәбиғәттә вегетариан ризыҡ ҡулланыуы һәр кемгә билдәле, хәйләкәрлек, ҡыйыулыҡ күрһәтә, ҡурҡыныс килгәндә тиҙ генә аңлап ҡаса һала.

Иң тәүҙә Рәсәйҙә модаға ингән ризыҡтарға туҡталайыҡ. Улар "оливье" һәм "тун аҫтындағы сельдь". Һуңғыһы турала һында ишеткәс, элекке бер көләмәс иҫкә төшә. Ир менән ҡатын ҡунаҡтан ҡайтып килә, ти. Ҡаршыларына хужаның әрмелә бергә хеҙмәт иткән иптәше осрай, ҡайҙа барғандарын, нимә менән һыйлауҙарын һораша. "Тун аҫтында сельдь" тигәнде ишеткәс, һаман шул ғәҙәтендә ташламағанһың икән, әрмелә лә икмәкте юрған аҫтында йәшереп ашай торғайның, тигән.

Росстатта иҫәпләүҙәренсә, бер йыл эсендә "оливье" салаты 8,53 процентҡа, "тун аҫтындағы сельдь" 5,52 процентҡа ҡиммәтләнгән. Был йыл дауамында йәшел борсаҡҡа, маринадланған ҡыярға, сельдь балығына хаҡ артыуы менән аңлатыла. Йомортҡа, йәшелсә, картуф, кишер арзанайыуын иҫәпкә алһаң, һуңғы салаттың хаҡы уртаса 480 һум торасаҡ.

Һәр хужабикә аш-һыу әҙерләүҙә, бигерәк тә Яңы йыл табынын биҙәгәндә, оҫталығын күрһәтергә тырыша. Ҡуянды итте күреү ҙә ҡурҡыта, быны байрам табынын ойоштороусылар бер генә лә оноторға тейеш түгел. Ул нисек кенә аҫ булмаһын, хатта сысҡанға ла теймәй, ләкин өҫтәлдә кәбеҫтә йә кишер күрмәһә, һеҙҙе аңламаясаҡ. Ә ит ризыҡтары яратыусылар өсөн кәңәш: ҡош-ҡорт итен генә бешереү менән сикләнегеҙ.

Ҡуян һөтимәрҙәр класына ҡарай, шуға күрә байрам табынына һөт эсемлектәре, һөт ризыҡтары ла ҡуйырға онотмағыҙ. Бынан тыш, лимонад, кофе, какао күрһә, ҡуян ҡыуанасаҡ ҡына. Борщ, башҡа төрлө ашты бешерергә ашыҡмағыҙ, сөнки улар Яңы йылды ҡаршылағас ҡына өҫтәлгә ҡуйылырға тейеш. Ҡуян майонезы, сыры, ите күп булған блюдоларҙы яратмай, шуға күрә "оливье"ны берәр еңел генә салатҡа алмаштырһаң, һәйбәт булыр, өҫтәп, емеш-еләк менән сикләнергә, аҙ һәм урта калориялы ризыҡ өҫтәлдә төп урын алырға тейеш.

Йыл хужаһы сәләмәт тормош яҡлы, шуға күрә һаулыҡҡа, матур буй-һынға, бигерәк тә ашҡаҙанға зыян итмәгән ризыҡҡа өҫтөнлөк бирергә кәрәк. Бешерелгән картуф, ҡабаҡ, төрлө салат-винегрет, емеш-еләк, ҡош-ҡорт ите блюдолары, тәм-том, бигерәк тә кишер һәм кәбеҫтә күрһә, ҡуян был хужалар мине ысын күңелдән ҡаршы ала, уларға йылымда тик яҡшылыҡ ҡына килтерермен, тип риза ҡалыр. Әйҙәгеҙ, табын ҡорғанда ошоларҙы ла иҫтә тотайыҡ!

**Фәриҙә МАНСУРОВА,
хужабикә.
Мәләүез ҡалаһы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Квант һикереүе ғалимдарҙы уҙып китә

Һеҙ үҙегеҙҙең аңығыҙҙы матди донъя төрмәһенән азат иттегеҙ. Бер нисә йыл айырылышып торғандан һуң, Аллаһы Тәғәлә менән ҡабат бәйләнеш булдырҙығыҙ. Заманында унан алыҫлашҡайнығыҙ, хәҙер үҙаллы кире ҡайтып, Аллаһы Тәғәләнең ярҙамын алдығыҙ. Аңығыҙ азат ителде - башығыҙға гениаль уйҙар килеүен көтөгөҙ!

"Гений" термины "джинн" һүҙенән барлыҡҡа килә. Фәрештәләр, феялар кеүек үк, ендәр ҙә Аллаһы Тәғәләнең ҡушҡанын үтәй. Улар уның бойороҡтарын тормошҡа ашыра. Улар кәрәкле кешеләр менән осрашыу кеүек көндәлек йәки лотереяла отош кеүек мөғжизәле ваҡиғалар ҙа булыуы мөмкин. Һеҙ - гений, йәғни ен! Үҙегеҙҙе гений кеүек тотоғоҙ, бөтөн донъя һеҙҙеке буласаҡ. Генийҙар үҙҙәрен нисек тота һуң? Улар проблеманы таный, уға тотона һәм зирәклеккә ярашлы эш итә.

Медитация һеҙҙең өсөн ғәҙәтигә әүерелде. "Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ... " - иҫләйһегеҙме? Күнекмә артынан күнекмә үткәреп, быны һеҙ 50 тапҡырҙан артыҡ эшләнегеҙ. Хәҙер медитация мөғжизәле тормошоғоҙҙоң бер серенә әүерелде. Был "тиҙ ярҙамға" мөрәжәғәт иткәнгә, йәшерен төймәгә баҫып хеҙмәтселәрегеҙҙе саҡырыуға, банкта эшләгән туғанын булыуына ҡарағанда яҡшыраҡ.

Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм һыңғай картина күҙаллағыҙ - тап ошо аҙымдар генийҙың зирәклегенә килтерә. Моғайын, һеҙ: "Оһо, бына мин нимә уйлап таптым!" - тип ҡысҡырып ебәрерһегеҙ. Оялмағыҙ, дауам итегеҙ. Илаһи көс мин-миңлектән азат, шуға ла һеҙгә бүләк иткән идеяһын үҙегеҙҙеке кеүек ҡабул итеүегеҙгә ҡаршы килмәй.

Ваҡыты-ваҡыты менән ниҙер хәл итеү башҡа кешеләргә, башҡа ваҡытҡа ҡарауы мөмкин. Был осраҡтарҙа уй йәки зирәклек хатта медитация ваҡытында ла килмәүе ихтимал. Әммә хаталанмағыҙ, Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе онотто тип яңылышмағыҙ. Донъяла бер үк ваҡытта бер нисә тәғәрмәс әйләнеүен аңлағыҙ.

Ауыр мәсьәләне хәл итеү өсөн бына нимә эшләй алаһығыҙ.

**"Нисек проблеманы хәл итеү юлын табырға" күнекмәһе**

• Эргәгеҙгә бер стакан һыу алып, уңайлы итеп ултырығыҙ, көсөргәнештән арынығыҙ. Өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм проблеманы йәки кәрәкмәгән хәл-торошто күҙаллағыҙ.

• Стакандан бер нисә йотом һыу эсегеҙ. Ике бармағығыҙҙы бергә ҡуйығыҙ.

• Уйығыҙҙан ғына: "Һәр йотом һыу менән проблеманы хәл итеү юлы асыраҡ күренә", - тип ҡабатлағыҙ.

• Һыу эсеүегеҙҙе һәм бер үк ваҡытта проблеманы хәл итеү юлын күреүегеҙҙе уйығыҙҙа ғына күҙ алдына килтерегеҙ.

• Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа урап ҡайтығыҙ.

**Роберт СТОУН.
(Дауамы бар).**

*АФАРИН!*

# ШАЙМОРАТОВСЫЛАР...

## ишәйә бара

**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Ғәли Ибраһимов исемендәге 2-се Башҡорт лицейының 5-се "Ш" һәм 6-сы "Ш" синыфы уҡыусыларын шайморатовсылар рәтенә ҡабул итеү тантанаһы уҙҙы. Балалар шайморатовсы исемен лайыҡлы йөрөтөргә, Башҡортостан һәм Рәсәйгә тоғро ул-ҡыҙҙар булып үҫергә ант итте.**



Тантаналы сарала балаларҙы Өфөнөң Ленин районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Мирхәт Ҡаҙарғолов, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Галина Ишмөхәмәтова, БР Мәғариф һәм фән министрлығының Милли мәғариф идаралығы начальнигы Илдус Ҡаһарманов, Батырлыҡ ордены һәм Жуков миҙалы менән бүләкләнгән яҡташыбыҙ Руслан, БР Эске эштәр министрлығының шәхси состав менән эшләү буйынса идаралығы начальнигы урынбаҫары, полиция полковнигы Әсхәт Ғарифуллин, полиция майоры, Башҡортостан буйынса Рәсәй гвардияһы "Урал" идаралығының оператив взводы отряды командиры Николай Тимченко, медицина фәндәре докторы Гүзәл Ибраһимова тәбрикләне. Украиналағы махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан Руслан йәш шайморатовсыларға 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы байрағын һәм улар үткән яу юлынан тупраҡ менән снаряд ярсығы тапшырҙы. "Ватан тарихының һәр осоронда беҙ тиңләшергә теләгән геройҙар бар. Беҙҙең тарихыбыҙҙа - Салауат Юлаев һәм Миңлеғәли Шайморатов. Юҡҡа ғына бөгөнгәсә Луганск Халыҡ Республикаһында башҡорт яугирҙарын рәхмәт менән хәтергә алмайҙар. Был яугирҙар күрһәткән батырлыҡ һәм физик көскә генә түгел, ә Ватан алдында бурыстарын тойоуҙары һәм иптәшлек хисенә лә бәйле. Лицейҙың шайморатовсылары ла ошо матур сифаттарҙы үҙендә тәрбиәләр, тип ышанам", - тине БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Галина Ишмөхәмәтова.

Был махсус кластарҙа белем алған балаларҙы физик һәм рухи яҡтан сыныҡтырыуға йүнәлтелгән, илһөйәрлек тәрбиәләүгә булышлыҡ иткән өҫтәмә дәрестәр үткәреләсәк. Мәҫәлән, 2-се Башҡорт лицейының шайморатовсылары ҡул һуғышы, атыу әҙерлеге нескәлектәрен төшөнә, һуңыраҡ "Аҡбуҙат" ипподромында һыбай йөрөргә лә өйрәнәсәктәр. "Шайморатов класында Ватанға хеҙмәт итеү өсөн уҡырға кәрәк. Тап Ватанға хеҙмәт итеү, уны һаҡлау, яҡшыртырға тырышыу - илһөйәрлек. Беҙҙең кеүек балалар тәбиғәтте ҡыйламай, тирә-яҡтағыларға ярҙам итеп, яҡшы уҡып та илһөйәрлек күрһәтә ала", - ти үҙенең ошо класта белем алырға теләгән аңлатып 6-сы синыф уҡыусыһы Әҙилә Билалова. Синыфташтары Рәмзил Ҡамбулатов һәм Данияр Мусин да ата-әсәһе менән кәңәшләшкәндән һуң шайморатовсылар рәтенә баҫырға ҡарар итеүе тураһында ғорурланып һөйләне. Малайҙар Шайморатов генерал кеүек еңелмәҫ һәм ҡурҡыу белмәҫ яугир булырға хыяллана.

- Ата-әсәләр директорыбыҙ Миләүшә Мырҙағәлинаға үҙҙәре "Шайморатов класы" ойошторайыҡ тигән теләк белдереп мөрәжәғәт иткәйнеләр, ҡаршы килмәнек. Балалар берҙәм, илһөйәр булып үҫһендәр, төрлө яҡтан камиллашһындар тинек. Сөнки улар строевой әҙерлек, ҡул көрәше, бейеү һәм патриотик йырҙар башҡарырға ла өйрәнәсәк, төрлө билдәле шәхестәр менән осрашыуҙар ойоштороласаҡ. Балаларҙы шундай матур тойғолар менән тәрбиәләргә маҡсат иттек, - ти уҡытыу-тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары Әлфиә Билалова.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостанда "Шайморатов кластары" 2019 йылда ойоштороla башлағайны, бөгөн уларҙың һаны - 78, был кавдивизияның күрһәткән батырлыҡтары өсөн Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған яугирҙары иҫәбенә лә тап килә. Илебеҙҙең, халҡыбыҙҙың яҙмышын, аяҙ күк йөҙөн хәстәрләр киләсәк тәрбиәләнә, тимәк.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

# ЕТЕ ЕГЕТ БӘЙГЕҺЕ



**"7 егет" телепроектының дүртенсе миҙгеле еңеүселәренең исемдәре билдәле булды.**

Төп бүләк - башҡорт тоҡомло ат Көйөргәҙе районынан Инсаф Йәмилевта. Тап ул күпселек һынауҙарҙы уңышлы үтте. Тамашасылар һөйөүе призын Баймаҡтан Мираҫ Үҙәнбаев яуланы. Башҡортостан юлдаш телеканалының төп сайтында ойошторолған онлайн-тауыш биреүҙә 10 000-дән ашыу тамашасы ҡатнашты.

"7 егет" реалити-шоуы - үҙенсәлекле телевизион проект, уның геройҙары халыҡ кәсептәрен үҙләштереп кенә ҡалмай, ә ысын тормош мәктәбен үтә. Телепроект мәҙәни традицияларҙы, халыҡ кәсептәрен һаҡлауға һәм пропагандалауға, шулай уҡ үҫеп килеүсе быуынды илһөйәрлек рухында, тыуған ергә һәм телгә һөйөү тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. Быйыл проект дүртенсе тапҡыр тормошҡа ашырылды. Тапшырыуҙар аҙна һайын "БСТ" һәм "Ҡурай-ТВ" телеканалдарында күрһәтелә. Реалити-шоуҙың финалын Яңы йыл төнөндә Башҡортостан юлдаш телеканалында ҡарарға була.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Ғинуар (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 2 (10) дүшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:29 | 16:58 | 18:28 |
| 3 (11) шишәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:30 | 16:59 | 18:29 |
| 4 (12) шаршамбы | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:32 | 17:00 | 18:30 |
| 5 (13) кесе йома | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:34 | 17:01 | 18:31 |
| 6 (14) йома | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:35 | 17:03 | 18:33 |
| 7 (15) шәмбе | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:37 | 17:04 | 18:34 |
| 8 (16) йәкшәмбе | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:39 | 17:06 | 18:36 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Декабрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Өфө районы** Шамонино ауылынан Гөлиә Исхаҡова, Эльвера Насирова, **Әбйәлил районы** Амангилде ауылынан Вәкилә Сафиуллина, **Белорет районы** Инйәр ауылынан Флүрә Иҫәнова, **Салауат районы** Ишембай ауылынан Әлмирә Хизбуллина һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Йән-тән сәләмәтлеге, рухи һәм матди байлыҡ, барлыҡ эштәрегеҙҙә уңыштар юлдаш булыуын, яҡындарығыҙ менән бәхетле, оҙон ғүмер итеүегеҙҙе теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**2 ғинуар "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 13.00 6+
**3, 5, 6 ғинуар "Алтын асҡыс - Remake"** (А. Толстой), музыкаль мажара. 11.00, 13.00 6+
**4, 7 ғинуар "Мираликундия"** (В. Лившиц, И. Кичанова), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**8 ғинуар "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. 12.00 6+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2, 6, 8 ғинуар "Холодное сердце"** (В. Гауф), әкиәт. 10.00, 12.00 6+
**"Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 13.00 0+
**3 ғинуар "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 11.00, 13.00 0+
**"Новогодние приключения Длинноуха"** (Л. Исҡужина), әкиәт. 10.00, 12.00 0+
**4 ғинуар "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 10.00 0+
**"Зимняя небылица"** (А. Горбунов), әкиәт. 11.00, 13.00 0+
**5 ғинуар "Синяя птица"** (М. Метерлинк), әкиәт. 11.00 6+
**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), Яңы йыл әкиәте. 10.00, 12.00 0+
**7 ғинуар "Золушка"** (Д. Корнелиссон), тамаша. 11.00 0+
**"Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 10.00, 12.00 0+
**8 ғинуар "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 11.00, 13.00 6+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2, 3, 4, 5, 6, 7 ғинуар "Главный Новогодний утренник Уфы"** - "Урал батыр и Три богатыря" эпик әкиәт. 12.00, 14.00 0+
**2, 5, 7 ғинуар "Щелкунчик"** Яңы йыл фантазияһы. 18.00 0+
**4 ғинуар "Филармонический Новогодник"**. 18.00 6+
**"Из Китая - с любовью!"** концерт. 18.00 6+
**6 ғинуар** Владислав Мортазин, орган классикаһы. 18.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**5 ғинуар** Өфө балалар филармонияһы сәхнәһендә: **"Волшебные приключения игрушек"** (С. Алферова, Н. Нижегородцева). 12.00, 14.00 0+
**7 ғинуар** Ҡала мәҙәни-ял итеү үҙәге ("Химик" МЙ) сәхнәһендә: **"Верные друзья"** (А. Хайт, А. Левенбук). 12.00, 14.00 0+
**8 ғинуар Премьера!** Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә: **"Щелкунчик"** (Ю. Ким). 12.00, 14.00, 16.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**4 ғинуар Премьера! "Сказка о рыбаке и рыбке"** (А.С. Пушкин, Л. Ниғмәтуллина инсц.), Яңы йыл тамашаһы. 13.00 0+
**6 ғинуар ""Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен), әкиәт. 13.00 0+
**"Алға, Баламишкин!"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**2-8 ғинуар "Как Баба Яга Соловья-разбойника женила"** Яңы йыл тамашаһы. 12.00 0+
**4 ғинуар "Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 18.00 12+
**5 ғинуар "Нисек кейәүгә сығырға?.."** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 18.00 12+
**6 ғинуар "Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+
**7 ғинуар "Ҡатын түгел - аждаһа"** (Д. Сәлихов), комедия. 18.00 16+
**8 ғинуар "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 18.00 16+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**4 ғинуар "Өлкән улым"** (А. Вампилов), комедия. 18.00 12+
**5 ғинуар "Приключения лесного Эха"**, әкиәт. 12.00 0+
**"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 18.00 12+
**6 ғинуар Баймаҡ ҡалаһында "Аленький цветочек"** (С. Аксаков), урыҫ әкиәттәре. 12.00 0+
**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драма. 18.00 16+
**7 ғинуар "Үәт, исмаһам, ахырызаман!"** (М. Багаев), комедия. 16+

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# ӘЙҘӘГЕҘ, ҮҘГӘРӘЙЕК!

**(Башы 1-се биттә).**

...Ишеткәнегеҙ барҙыр, Йыһан серен өйрәнеүсе ғалимдар Ер шарыбыҙ Һыуғоярҙар эраһына инде, тип иҫкәртә. Йәғни, беҙ дәүерҙәр алышынған осорҙа йәшәйбеҙ булып сыға. Ә Һыуғоярҙар эраһы - ул белемле, мәҙәни, мәғрифәтле, мөхәббәтле кешеләр заманы, тиҙәр. Йыһан ғилеме ғалимдары билдәләүенсә, әлеге дәүер кешеләренә белем алыуҙың мәктәп һәм институт кимәлендә генә туҡталып ҡалмай, һәр саҡ үҫештә, эҙләнеүҙә, рухи һәм аңлы ынтылышта булыуы хас. Һыуғоярҙар дәүере кешеләре әйләнә-тирәһендә тәртип булдыра, үҙенең ғүмере, йәшәйеше, хатта Ер шарындағы именлек өсөн яуаплылыҡ ала, бар кешелеккә Һөйөү энергияһын йүнәлтә. Осраҡлылыҡтар булмай икәнен белеп, барыһын да белеменә, аңына, Һөйөү менән һуғарылған асылына таянып эшләй. Бына шулай тип яҙылған интернеттағы яҙмаларҙа Һыуғоярҙар дәүере үҙ итер кешеләр тураһында.

Һүҙемде ошо юҫыҡта дауам итеп, үҙебеҙҙә Һыуғоярҙар эраһына лайыҡлы сифаттар тәрбиәләйек, тип әйҙәләмәксемен. Иң тәүҙә Һөйөү һәм Позитивлыҡ кеүек иң мөһимдәренә эйә булыу мөһимдер. Сөнки Һөйөү самалы күңелдәрҙә, шул арҡала беҙҙә негатив баҫып алып бара ла инде. Беренсе сиратта, әйҙәгеҙ, негативтан ҡотолоу сараларын өйрәнәйек. Бер саҡ Сибай ҡалаһынан Тәлғәт Солтанов атлы табип ошо хаҡта: "Үҙеңде ыңғайға көйләп, халҡыбыҙ файҙаһына кәрәкле эш менән мәшғүл булып йәшәһәң, тормошта осрап торған негатив күренештәргә, әгәр улар ысынбарлыҡты дөрөҫ сағылдырмай икән, иғтибарыңды бүлеп, көсөңдө сарыф итеп тороуҙың да кәрәге юҡтыр, сөнки негатив - ул емереүсе көскә эйә кире хис-тойғо, агрессив энергия. Шуға күрә негативҡа "туҡланырға аҙыҡ" бирмәһәң, ул үҙенән-үҙе юҡҡа сығасаҡ, тигән уйҙамын", - тигәйне. "Иң мөһиме - тормошобоҙҙа осрап торған негатив ауына эләгеүҙән һаҡ булырға, бының өсөн үҙеңдә тыныслыҡ һәм көслө ихтыяр тәрбиәләргә, үҙеңдең кимәлеңдән түбән төшмәҫкә; нахаҡ, ғәйбәт, мыҫҡыллау кеүек ҡайһы бер ыуаҡай бысраҡлыҡтарҙы төптө ҡабул итмәҫкә, доға йә башҡа берәй психологик алым ярҙамында таҙарынырға, позитив көйләнешкә өйрәнергә кәрәк. Шул ваҡытта бер ниндәй негатив та энергетик балансығыҙҙы боҙа, емерә алмаясаҡ", - тип тә кәңәш биргәйне Гөлфиә Хәбирова исемле уҡыусыбыҙ. Һәм һығымта урынына шундай риүәйәт: "Ҡарт үҙенең ейәненә бер донъя серен аса: "Һәр кешелә ике бүре араһындағы көрәш бара. Бер бүре насарлыҡ яҡлы, ул көнләшеү, эгоизм, алдау, негатив өсөн алыша. Икенсе бүре яҡшылыҡ яҡлы, ул мөхәббәт, өмөт, дөрөҫлөк, изгелеккә, позитивҡа өндәй". Малай олатаһының һүҙҙәрен йөрәгенә бик яҡын ала һәм шулай тип һорай һала: "Ә бүреләрҙең ҡайһыһы еңә һуң, олатай?" Ҡарт йылмайып яуап бирә: "Ҡайһыһын ашатһың, шуныһы еңә инде, улым..."



Уйланырға урын бар бында. Ә шулай ҙа беҙҙең быйыл 20 йыллығын билдәләгән "Киске Өфө"бөҙ Һыуғоярҙар эраһына лайыҡлы халәттәлер, тигән фекерҙәбеҙ. Баҫмабыҙ йөкмәткеһе Позитивлыҡ, Уңыш, Һөйөү, Эшлеклелек, Илһөйәрлек, Телһөйәрлек, кешелектең тағы әллә күпме аҫыл асылын билдәләүсе сифаттары юҫығына көйләнгән һәм шул юлды дауам итә. Был йүнәлешебеҙгә, әлбиттә, иң тәүҙә беҙҙең аңлы, зыялы, белемле, кәңәшле, рухлы уҡыусыларыбыҙ ҙа булышлыҡ итәлер, тим. Һис онотолмай рәссам-скульптор Фәүзиә апай Усманованың гәзитебеҙҙең тәүге һанын алып уҡығас та яҙып һалған ошо талап-кәңәше: "Яңы баҫманы берүк күңелдәрҙә ҡурҡыу тыуҙырған ниндәйҙер криминаль хәлдәр, тоғро юлдан яҙҙырырҙай негатив хәбәрҙәр менән тултырмағыҙ. Һеҙҙең гәзит беҙҙе тәрбиәләһен, изгелек, яҡты хистәр, кешеләргә, донъяға, тәбиғәткә - бар тарафҡа мөхәббәт, хөрмәт менән ҡарарға өйрәтһен", - тип яҙып ебәргәйне ул. Артабан ул беҙгә аҙна һайын позитивлыҡҡа көйләнгән матур хаттар ебәреп торҙо, әле лә улар гәзит биттәрендә баҫылып тора. Фәүзиә апайыбыҙға 20 йыл буйы беҙҙең менән бергә булғаны өсөн оло рәхмәттәребеҙҙе еткерәбеҙ.

Уҡыусыларыбыҙ араһынан рәхмәттәребеҙҙе юллар авторҙарыбыҙ әллә ни күп түгел, әммә берәгәйелеләр: отставкалағы хәрби медицина подполковнигы Хәлил Һөйөндөковтың сығыштарын һәр кем көтөп алғанын беләбеҙ. Уны беҙ ҙә бик юғары баһалайбыҙ, быйыл хатта Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһына ла тәҡдим иткәйнек. Сөнки ул бөгөнгөнөң иң актуаль темаһы - илһөйәрлек мәктәбе буйынса тос, кәрәкле, тәрбиәүи, заманға яраҡлы һүҙҙе әйтеүсе автор-публицистарҙың береһе. Әммә баһалама комиссияһы уның был талантын баһалай алманы, сәбәбе - был комиссияла ла башҡорт телен белгән, авторыбыҙ әйткән һүҙҙең әһәмиәтен аңлаған кешеләр юҡ һанында ине...

"Киске Өфө" мәғлүмәти баҫма ғына түгел, ул уй, аҡыл, фекер төйнәтә торған яҙмаларға күберәк урын бирә. Шуға ла беҙ ошондай фәһемле сығыштары менән уртаҡлашҡан авторҙарға өҫтөнлөк бирәбеҙ: Бәҙри Әхмәтов, Әғләм Шәрипов, Урал Мостафин, Ғәлиә Кәлимуллина, Сәрүәр Сурина, Исмәғзәм Исмәғилев, Зәкирйән Әминев, Наилә Хәмбәлиева, Наил Юлдашбаев, Шамил Батыршин... Һәм тағы. Шәйләйһегеҙҙер, беҙ бер үк тиерлек яҙыусыларҙың, мәҫәлән, башлыса Иҙрис Ноғоманов, Фәрзәнә Аҡбулатова, Хәйҙәр Тапаҡов, Зөлфирә Ҡаҙаҡбаеваларҙың проза әҫәрҙәрен баҫабыҙ. Оло яҙыусыларыбыҙҙан Ғәлим Хисамов, Наил Ғәйетбай ағайҙарҙың әҫәрҙәрен дә шатланып ҡабул итәбеҙ. Сөнки уларҙың яҙғандары ысынлап та проза ҡанундарына, йөкмәткеһе менән заман талабына, уҡыусыларыбыҙ зауығына тап килә, тигән фекерҙәбеҙ. Бөгөнгө замандың китап уҡыусыһы, гәзит-журнал уҡыусыһы зауығы ошондай әҙәби ҡанундар, әҙәби ҡағиҙәләргә нигеҙләнгән әҫәрҙәр өлгөһөндә тәрбиәләнергә тейеш. Юҡһа, беләһегеҙ, әҙәбиәт майҙанында ла "сүп-сар" өҫтөнлөк итеп китә ҡайһы саҡ...

**Әйткәндәй, Һыуғоярҙар эраһында кешелек үҙенең әйләнә-тирәһендәгеләр һәм бар Ер шары алдындағы яуаплылығын аңлағандан һуң, уй-ниәттәренә төҙәтмәләр индереп, хаталар өҫтөндә эшләп, дөйөм маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн берләшеү аҙымдары яһаясаҡ, тигән фаразы ла бар Йыһан ғилеме ғалимдарының. Беҙ бөгөн тап ошо - Ерҙә тыныслыҡ, һиллек хөкөм һөрһөн өсөн илдәр, донъялар менән идара итеүселәр күңелендә мәрхәмәтлек, айыҡ аң өҫтөнлөк алһын, кешеләр дуҫлыҡҡа, татыулыҡҡа ынтылһын, тигән теләктәбеҙ. Әммә ошо мөғжизә ысынбарлыҡҡа әйләнһен өсөн үҙебеҙгә лә үҙгәрергә кәрәк, тигәнде бер аҙ ғына иҫкәртеп ҡуйырға теләгәйнем. Яңы йыл менән!**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АҪТЫРТЫН АҪТАН КИҪӘ...

## өҫтән ялғай

Тура һүҙ таш яра, ялған һүҙ баш яра.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Иртәнге ҡояшҡа һәм яҙҙарға нисек ҡыуанғанығыҙға ҡарап, үҙ һаулығығыҙ тураһында фекер йөрөтөгөҙ.

**(Генри Торо).**

Үҙ хәленә шөкөр итеүгә өлгәшеүе барыһына ҡарағанда ла ауырыраҡ, сөнки үҙең тураһында яҡшы уйларға тырышыуҙар иң һуңынан " үлә" бит...

**(Томас Элиот).**

Наҙан, аңра кешеләргә башын иҫәрлеккә һалып, нисек теләй - шулай ҡыланыу, ни теләй - шуны һөйләү еңелерәк бирелә.

**(Зигмунд Фрейд).**

Америкала - "Хәлең нисек?" тип, Европала "Һин кем?" тип һорау ғәҙәти хәл.

**(Граффити).**

Бурыс ҡанаттан еңелерәк һәм тауҙан ауырыраҡ.

**(Япон мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Конфуцийҙың Гун, Лу һәм Чжан исемле өс уҡыусыһы булған. Донъя гиҙеп йөрөүсе бер дәрүиш аҡыл эйәһенән һорай ҡуйған:**

**- Һеҙ Гун исемле уҡыусығыҙ тураһында ни әйтерһегеҙ?**

**- Хатта ғалимдар Гундың аҡылына һоҡлана!- тигән Конфуций.**

**- Ә Луҙың ниндәй матур сифаттары бар?**

**- Танылған яугирҙарҙың батырлығы ла Луныҡына тиңләшә алмай!**

**- Ә өсөнсө уҡыусығыҙ тураһында ни әйтерһегеҙ?**

**- Чжандың егәрлеге иң оло маҡтауға лайыҡ! - тигән Конфуций.**

**Уҡытыусының уҡыусылары тураһында былдай маҡтаулы һүҙҙәрен ишеткәс, дәрүиш бик ныҡ аптыраған һәм:**

**- Һуң Гуан шул тиклем аҡыллы, Лу шул тиклем батыр, ә Чжан шул ҡәҙәре егәрле булғас, улар тағы нимәгә өйрәнә һеҙҙән? - тип һораған.**

**- Улайһа, тыңла, - тигән Конфуций. - Гун аҡыллы, ләкин ялҡау. Лу батыр, ләкин дыуамал. Чжан егәрле, ләкин көнсөл.**

**Гун ялҡау кешегә аҡыл ғына бәхет килтермәйәсәген белмәй. Лу иһә, һаҡ булмаһаң, батырлыҡтың үлем менән тамамланыуы ихтимал икәнен күҙ алдына ла килтермәй. Чжан көнсөллөк эргәһендә шатлыҡ йәшәмәй икәнен белмәй. Ошо хәҡиҡәткә өлгәшмәй тороп, мин был егеттәрҙең уҡытыусыһы, улар минең уҡыусым булыуҙан туҡтамаясаҡбыҙ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22052

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
28 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3540
Заказ - 1650